✓ ***Рабийанан һорағандар: "Һин Бөйөк Аллаһы Тәғәләне яратаһыңмы?" "Яратам", - тип яуап биргән ул. "Ә Шайтанды күрә алмайһыңдыр, шулай бит?" "Юҡ", - тигән яуап яңғыраған. Кеше аптыранған: "Ни өсөн - юҡ?" Рабийа яуап биргән: "Аллаһҡа булған мөхәббәтем бар йөрәгемде биләй һәм Шайтанға ҡарата нәфрәткә урын ҡалмай".***

***(Аттар).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№36 (454)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Яңы уҡыу йылының...**

яңы яңылыҡтары



4-5

**Зимагорҙар ҡалала...**

аҡсаны "көрәп" аламы?



7

**Урман мәңгелек икән, тиһәк...**

урмандарыбыҙ урынында ҡаҡ ер ҡалып бара



8-10

**Үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ яҙабыҙмы,**

әллә яҙмыш маңлайға яҙылғанмы?



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн мәғариф системаһын төрлө реформалар менән һынау дауам итә. Был реформалар системаны камиллаштырамы, емерәме?

***Рауил БИКБАЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эше буйынса комитеты рәйесе:*** Һуңғы осорҙа мәғариф өлкәһендә реформалар, эксперименттар, һынауҙар шул тиклем күбәйҙе, мин хатта уларҙың күбеһенең мәғәнәһен дә күрмәйем. Эксперимент, яңы стандарттар барыһы ла халыҡҡа хеҙмәт итергә тейеш, ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөн уларҙың күбеһе элекке көйләнгән мәғариф системаһын емерә, тыуған ерлектән, халыҡ рухынан, традицияларҙан айыра. Объекты булып бала торған өлкәлә әленәнәле эксперименттар үткәреүҙең әхлаҡи яғы реформа уйлап сығарып ултырыусыларҙы бөтөнләй борсомай, күрәһең. Яңы стандарттарҙың мәктәп уҡыусыһына базалы фәндәрҙе үҙенә һайлау мөмкинлеге биргән йәки өлкән синыф уҡыусылары өсөн мотлаҡ уҡытылырға тейешле итеп "Донъяла Рәсәй", "ОБЖ", "Физкультура" дәрестәрен билдәләгән закон проекттары аптырата ғына.

Былтыр башланған оптималләштереү процесы һөҙөмтәһендә күпме милли мәктәптәребеҙ зыян күрҙе. Ауылда аҙ комплектлы мәктәптәр ябылыу сәбәпле, ата-әсәләр бәләкәй балаларын иртә менән автобусҡа ултыртып, сит ауылға йәки район үҙәгенә мәктәпкә сығарып ебәрергә мәжбүр. Быйылғы уҡыу йылында ошо уҡ яҙмышҡа дусар булыусы мәктәптәр тағы артмаҫ, тигән ышаныс юҡ. Шунан, хәҙерге йәш быуын халыҡсан рухтан алыҫлаша, тип аптырайбыҙ.

Яңы законға ярашлы, хәҙер белем биреү усаҡтары бер нисә төркөмгә бүленәсәк. Белем биреүҙең дәүләт заказы булған өлөшө генә ҡаҙнанан финансланасаҡ. Ҡалған сумманы мәктәп үҙаллы эшләп табырға тейеш. Балалар баҡсалары, мәктәптәр нисек аҡса эшләргә тейеш һуң? Бар көс ата-әсә елкәһенә ятып ҡуймаҫмы, тигән һорау бик борсой мине. Әгәр ҙә мәктәптә ҡайһы бер өҫтәмә дәрестәр өсөн түләргә тура килһә? Быларға Рәсәй халҡының 40 проценты тирәһененең етеш йәшәмәүен дә өҫтәһәк, күп балалар был түләүле предметтар буйынса белем ала алмаясаҡ. Был бер нисек тә яҡшы эҙемтәләргә килтерә алмай. Быны мин дәүләттең халыҡ мәғарифын үҙ елкәһенән халыҡ елкәһенә һалыу, тип аңлайым.

***Лилиә ХАЛИҠОВА, БР Мәғариф үҫтереү институтының психология кафедраһы мөдире:*** Мәғариф системаһындағы һәр яңылыҡты йәмғәтселек ни өсөндөр тәүҙә кире ҡабул итеүсән. Әммә реформаларҙың ыңғай яҡтарын да күрә белергә кәрәк. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта барыһы ла быйылғы уҡыу йылы башынан беренсе синыф уҡыусыларын яңы федераль стандарттар менән уҡыта башлау тураһында ғына һөйләй. Был стандарттар буйынса белем биреүҙә шәхес үҫтереү, быны өсөн яҡшы шарттар тыуҙырыуға күп урын бүленә, ә һәр бала менән индивидуаль эшләү уларға киләсәктә оло тормош юлында юғалып ҡалмаҫҡа булышлыҡ итәсәк. Яңы стандарттар балаға үҙенең индивидуаль мөмкинселектәренә, психологик мөмкинлектәренә тап килгән һөнәр һайларға ярҙам итәсәк. Быны уҡыусы өсөн шәхси файҙаһы ла күп, әгәр ҙә бала үҙенең һәләттәрен аса һәм үҫтерә алған мәктәптә уҡыһа, әлбиттә.

Белем биреүҙә электән тәрбиәүи аспект булды, әммә ул әлегә тиклем федераль кимәлдә күтәрелгәне юҡ ине. Ил тарҡалып, коммунистик идеология юҡҡа сығыу менән балаға белем биреүҙә күберәк интеллектуаль үҫешкә иғтибар бүленә башланы. Был балаларҙың үҙ-ара аралаша белмәүенә, әхлаҡ нормаларының ҡаҡшауына килтерә яҙҙы. Быны тағы бер сәбәбе - һуңғы егерме йыл эсендә ғаилә институтының бәҫе төшөүе. Сөнки баланы мәктәп түгел, ә ғаилә тәрбиәләргә бурыслы. Әйткәндәй, яңы стандарттар ата-әсәне лә белем биреү процесына йәлеп итеүҙе күҙ уңында тота. Тимәк, былар барыһы ла киренән йәмғиәттә ғаиләнең, атай, әсәй тәрбиәһенең баһаһы үҫеүенә килтерәсәк.


**(Дауамы 2-се биттә).**


ТУҠТА, МӘЛ!

## Белем көнө менән!



ИШАРА

# ҺУҠЫР ҺУҠЫРҘЫ ЕТӘКЛӘҺӘ...

## соҡорға осорҙар бит

**Йәҙгайным инде һеҙгә был бик боронғо һүҙҙәрҙе: "Янында аралашыр, аҡыл алыр кешеләр булмаһа, үткән ваҡыттарҙа йәшәгәндәр менән аралаш". Ысынлап та, аралашыу ҡытлығы кисергән мәлдәр була. Рәми Ғариповтың арабыҙҙан китеүенә 33 йыл булып китте, әммә уның шиғырҙарынан аҡыл алам, шул аҡыл аша уның менән аралашыуҙы дауам итәм.**

Бына "Матурлыҡ" тип аталған шиғырын уҡыйым:

*Үтер йылдар,*
*Үтер күп быуаттар*
*Һәм асылыр яңы донъялар.*
*Беҙҙең тормош,*
*Беҙҙең әкиәттәр*
*Тарих биттәренә ояла.*
*Был тарихты уҡып киләсәктә*
*Рәхәтләнеп, бәлки, көлөрҙәр!...*
*Ә кем белә,*
*Бәлки, беҙгә кире*
*Ҡайтыр өсөн һағынып йөрөрҙәр!*
*Һағынмаһалар ҙа,*
*Һокланырҙар:*
*Ниндәй көс, тип,ниндәй батырлыҡ!*
*Шул батырлыҡ -*
*Беҙҙең матурлыҡта,*
*Ә бит ҡабатланмай матурлыҡ.*

Тояһығыҙмы, тап әлеге көндәрҙәге беҙҙең уйҙарыбыҙға тап килеп тора был шиғри юлдар. Тик шиғырҙың һуңғы юлы ғына күңелде әйҡәй. "Рәми ағай, ҡабатланыр ул матурлыҡ!" тип өндәшке килә лә тора. Шағир совет осоронда яҙған бит был юлдарҙы, ул саҡта, бәлки, матурлыҡтың, батырлыҡтың, тарихтың ҡабатланыуына өмөт тә аҙыраҡ булғандыр.

Быйыл, мәҫәлән, тағы ла Салауат йыйынын ҡарап һокландым. Һәр ырыу егеттәренең сығышын ҡараныу, яңырыу тип ҡабул иттем. Боронғо атай-олатайҙарыбыҙ беҙгә бик ҡиммәтле бүләктәр ҡалдырған шул. Йолаларыбыҙ, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр, йыһан кимәлендәге юғары фәлсәфәле ҡобайырҙар. Беҙҙең бурыс - ҡомарҡты-бүләктәрҙе ҡәҙерләп һаҡлап, киләһе быуындарға тапшырыу. Тик ошо бурысты инеҫбеҙгә йөкмәп барғанда абынмаҫҡа, ситкә боролоп китмәҫкә ине. Юлдан яҙҙырырға әҙер тороусылар етерлек бит хәҙер. Гәзитебеҙҙең һуңғы һанында Әхмәр Үтәбай "Йәшерен яуҙы юҡҡа һанама" мәҡәләнә аңлатма бирә. Һәр кемгә ышанып барыу, асыҡтан-асыҡ һөйләү саф башҡорттоң бәләһенә лә әүерелеп китә шул ҡайсаҡ. Хәйлә етмәй башҡортҡа. Йәшерен яуҙың барлығын белеп тә еткермәйбеҙ. Сөнки мәғлүмәт етешмәй. Мәҫәлән, гәзитебеҙҙән журналист Таһир Ишкининдың яҙғандарын уҡып, дөрөҫ фекерләйемме, дөрөҫ аңлайыммы ысынбарлыҡты, тип, уйҙарымды сағыштырыу мөмкин ине. Ул да яҙыуҙан туктаны һуңғы ваҡыт. Күптәр телевизорҙан "Яңылыҡтар"ҙа ҡарамай йәшәй. Танышыңа берәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң: "Мине сәйәсәт ҡыҙыҡһындырмай", - тигән яуап алаһың. Беҙҙе барыһы ла ҡыҙыҡһындырырға тейеш, йәмәғәт. Бер картина бар. Унда һүрәтләнгәндең мәғәнәһе шул: "Әгәр һуҡырҙар һуҡырҙарҙы етәкләһә, улар барыһы ла бергәләп соҡорға тәгәрәр". Һуҡыр булмайыҡ.

...Үткәндәрҙе һағынам, ата-бабаларыбыҙҙың батырлығына һокланам. Батырлыҡ - матурлыҡ икәнен онота ғына күрмәһен инде киләһе быуын, тип хыялланам.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн мәғариф системаһын төрлө реформалар менән һынау дауам итә. Был реформалар системаны камиллаштырамы, емерәме?

(Башы 1-се биттә).

***Гүзәл ФӘХРИСЛАМОВА, Өфө ҡалаһы Фәнни-методик үҙәгенең милли мәғариф бүлеге методисы:*** Был һорауға ҡыҫҡа ғына яуап биреп тә булмай. Миҙал ике яҡлы булған кеүек, һәр яңылыҡтың да ыңғай һәм кире яҡтары була. Шулай уҡ яйға һалынып киткәнсе, һәр яңылыҡтың хәл ителә торған проблемаларын үткәреп ебәрә белергә кәрәк. Мәҫәлән, быйылғы уҡыу йылынан мәктәптәргә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары индерелә, һәм был ваҡиғаны мин бик ыңғай баһалайым. "Беҙҙең яңы мәктәп" тигән мәғариф инициативаһында алты йүнәлеш билдәләнгән һәм уларҙың өсәүһе шәхсән беҙгә, уҡытыусыларға, ә ҡалған өлөштәре мәктәп администрацияһына, мәғариф бүлектәренә һәм идараларына ҡағыла. Беҙ яңы заманда йәшәйбеҙ, шуға яңы ҡараштар, яңылыҡтар мәғариф системаһында ла булырға тейеш. Яңы стандарттар буйынса һәләтле балалар менән эш тә, уҡытыусыларҙың белем кимәлен камиллаштырыу ҙа ҡаралған. Шуға ла, беҙгә реформалар кәрәкмәй, тип инҡар итеп ултырмай, уларҙың иң яҡшы моменттарын эшендә ҡулланып эшләһәң, белем биреү системаһында яҡшы үҙгәрештәр булыр, тип уйлайым.

Беҙ, туған тел уҡытыусылары, илдә ниндәй генә сәйәсәт алып барылмаһын, үҙебеҙҙең илдең, телдең патриоттары булып ҡалырға тейешбеҙ. Ниндәйҙер ҡаршылыҡтар килеп тыуа икән, уларҙы хәл итеү юлдарын да табырға тырышабыҙ. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, беренсе синыфтан дәүләт телен уҡытыу ҡаралмаған. Төбәк базис планы буйынса, уҡыусыларҙың туған телен өйрәнергә хоҡуғы бар һәм беҙ уны боҙа алмайбыҙ, мәктәптәр балалар өсөн ишектәрен асҡанға тиклем туған тел буйынса директор урынбаҫарҙары үҙҙәре эшләгән белем усаҡтарында аңлатыу эше алып бараһаҡ. Ә өлкән синыфтарҙа дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу мәктәп администрацияларының ҡарамағына ҡалдырылған. Мәктәп директорҙары был мәсьәләне гел ыңғай хәл итергә тырыша һәм бөгөнгө көнгә Өфөнөң бөтөн мәктәптәрендә лә тиерлек 10-11 синыфтарҙа бер сәғәт дәүләт теле булараҡ башҡорт теле, бер сәғәт туған тел уҡытыу ҡалдырылды.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"



**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм гәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма алаҫаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. **Ә сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

*Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

*Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урыныңыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **228 һум**.

* Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов иген баҙарында хаҡ кәмеү менән бәйле ауыл етештереүселәренә ярҙам итеү маҡсатында игендең республика резерв фондын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Бының өсөн Башҡортостан Республикаһы ҡаҙнаһы гарантияһы менән 1,5 миллиард һумлыҡ заем аҡсаһы йәлеп ителәсәк. Фондта 530 мең тонна самаһы яңы уңыш игене тупланасаҡ. Ул ауыл эшсәндәренән залог буйынса һатып алынасаҡ.

✓БР Президенты "Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының территориаль органдары тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, Башҡортостанда Һаулыҡ һаҡлау министрлығының территориаль органдары ойоштороласаҡ.

✓Быйыл йыл аҙағына тиклем республиканың дәүләт һәм муниципаль учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 15 процентҡа артасаҡ. БР Хөкүмәте башҡарма власть органдары алдына хеҙмәт хаҡын 2014 йылға 1,5 тапҡырға арттырыу бурысын ҡуйҙы. 2011 йылдың ғинуар - июнендә муниципаль учреждениелар хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡы 11 процентҡа артҡан һәм 10504 һум тәшкил иткән, дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренеке иһә 8 процентҡа күтәрелеп, 12247 һумға еткән.

✓БДУ ғалимдары "2010 йылдың иң яҡшы фәнни китабы" Бөтә Рәсәй конкурсында лауреат исеме яулаған. Эксперттар Рәсәйҙең 520 вузынан 3880 эште ҡарап, алты номинация буйынса БДУның туғыҙ ғалимының эшен иң яҡшыһы тип билдәләгән. Уларға Сочиҙа үтәсәк тантанала гранттар һәм дипломдар тапшырыласаҡ.

✓Дөйөм Рәсәй Халыҡ фронтының "Халыҡ ҡаҙнаһы" проектына тәҡдимдәр йыйыу башланды. Тәүгеләрен Дәүләкән ҡалаһында үткән йыйылышта ҡаранылар. Унда 16 район һәм ике ҡала проекты тыңлауға сығарылды. Тәҡдимдәрҙе тыңлау һәм фекер алышыу дүрт майҙансыҡта үтәсәк: 31 августа -Белорецта, 6 сентябрҙә - Бөрөлә һәм 9 сентябрҙә - баш ҡалала. Тикшереүгә бөтәһе 62 муниципаль берәмектән 168 проект тапшырылған.

✓Башҡортостанда йыл башынан 560 автомашина урланған, 94-е әлегәсә табылмаған. БР буйынса ЮХХДИ идараһы хәбәр итеүенсә, һәр өсөнсө автомобиль- Өфө кешеһенеке. Уҙған йыл менән сағыштырғанда, машина урлау осраҡтары 36 процентҡа артҡан.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!



# БАЛА ҒҮМЕРЕНӘ...

## XXI быуат чумаһы янай

**РФ Дәүләт Думаһы депутаттары педофилдарға ҡаршы медицина ысулдары ярҙамында көрәшергә йыйына. Күптән түгел Рәсәй парламенты ҡарауына аҙғындарҙы химик юл менән кастрациялау (бестереү) тураһында закон проекты индерелгәйне. Депутаттар был процедура ауыртыныуһыҙ үтәсәк тип ышандыра.**

Педофилдарҙы төрмәнән сығыуҙарына ярты йыл ҡалғас "эшкәртә" башлаясаҡтар. Закон проектын алға һөрөүсе депутат Антон Беляков аңлатыуынса, химик кастрация шунан ғибәрәт: организмға ирҙәрҙең енси гормондары - тестостерон тәьҫирен блокадалаусы махсус препарат ебәрелә, ул енси теләкте баҫтырыу һәләтенә эйә. Шул уҡ ваҡытта был процедураның тәьҫирен туҡтатыу ҙа мөмкин. Суд йәки тикшереү хатаһы арҡаһында нахаҡҡа ғәйепләнеүе асыҡланған хәлдә ир-егеткә был препаратты ебәреү туҡтатыла һәм уның ирлек һәләттәре кире ҡайтарыла.

Парламентарийҙар фекеренсә, был сара аҙғынлыҡҡа бирелеүселәр һанын байтаҡҡа кәметер ине, юғиһә улар артҡандан-арта ғына бара. Һуңғы дүрт йылда ғына ла Рәсәйҙә педофилия осраҡтарын теркәү 25 тапҡырға артҡан, ә көн һайын 47 бала енси көсләүгә дусар ителә. Шул уҡ ваҡытта был енәйәттәрҙең күпселек осраҡтары рецидивистар өлөшөнә тура килә. Медицина статистикаһынан күренеүенсә, ултырып сыҡҡан аҙғындарҙың 97 проценты ҡабаттан үҙенең элекке шөғөлөнә тотона. Химик кастрация ысулын законлаштырған илдәрҙә иһә педофилдарҙың 3 проценты ғына ҡайтанан аҙғынлыҡ юлына баҫа.

Миллионлаған кешеләрҙе борсоуға һәм хафаға һалған был мәсьәләгә ҡарата РФ һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикованың мөнәсәбәте бик сәйер. Бынан алдараҡ ул енәйәтселәргә химик кастрация үткәреү процедураһын "үтә күп сағымдарға килтерәсәк" тип баһалағайны. "Балаларҙы педофилдарҙан һаҡлау сараһын "сығымлы" эш тип, балалар хәүефһеҙлеген, һаулығын һәм ғүмерен аҡса менән иҫәпләп ултырыу, өҫтәүенә, бындай һүҙҙәрҙе ҡатын-ҡыҙҙан ишетеү оят хатта", - тип фекерен белдерә депутат А. Беляков.

Бәлки, тап ана шундай киҫкен саралар ҡулланылмаған өсөн дә беҙҙә педофилдар йылдан-йыл арта ғына баралыр. РФ Тикшеренеү комитетындағы енәйәт эштәре буйынса, 2010 йылда 4175 бәлиғ булмаған бала өлкәндәр тарафынан енәйәтсел рәүештә көсләүгә дусар ителгән. Шуларҙың 322-һе - 1 йәшкә тиклемге, 329-ы - 1 -5 йәшлек, 1859-ы - 5-14 һәм 1665-е 14-тән 18 йәшкә тиклемге балалар һәм үҫмерҙәр.

Иҫ китмәле, йығылып китерлек хәл, ләкин Рәсәйҙә бындай хәшәрәтлеккә юл ҡуйыусы "кешелекле шарттар" булдырылған. Мәҫәлән, педофилдарға закон буйынса мәктәптә һәм башҡа мәғариф учреждениеларында эшләү һис тыйылмай. Закон буйынса, 12 йәшлек үҫмер үҙ ризалығы буйынса өлкән кеше менән енси бәйләнешкә инә ала. Бала риза булмаған хәлдә лә уны көсләүсе аҙғындар бик йомшаҡ хөкөм ителә: РФ Енәйәт кодексының134-се статьяһы ни бары 4 йылға иркенән мәхрүм итеүҙе йә булмаһа шартлы рәүештә яза биреүҙе ҡарай.

РФ Тикшеренеү комитеты рәйесе А. Бастыркин билдәләүенсә, 2010 йылда енси тейелмәҫлеккә ҡаршы енәйәт ҡылыусыларҙың 2 меңдән ашыуынан бынан алда бирелгән суд язаһы алынмаған йәки ул ахырынаса башҡарылмаған, 500-ләп кеше ваҡытынан алда иреккә сығарылғандан һуң ҡабаттан енәйәт ҡылған. Күренеүенсә, был өлкәлә бер ниндәй законлылыҡҡа ишара ла юҡ.

- Закондарҙы үҙгәртмәй тороп, педофилдар менән көрәшеп булмаясаҡ, - ти Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов. Уның фекеренсә, иң тәүҙә бәлиғ булмағандарҙың енси тейелмәҫлегенә ҡаршы ҡылынған енәйәт эштәрен ҡарағанда(РФ Енәйәт кодексының 131 - 135- се статьялары) йәш айырмалары 4 йылдан артығыраҡ тәшкил иткән осраҡтарҙа зыян күреүсе менән ризалаштырыу нормаларын ҡулланыуҙы тыйырға. Яза сроктарын арттырыу кәрәк, сөнки 4 йыл - ул бик аҙ. Бындай эштәр буйынса күптәнгелек срогы тигән төшөнсәне лә алып ташларға кәрәк. Хәшәрәт юлға баҫҡан әҙәмдәрҙе белем биреү, мәғариф учреждениеларына эшкә алыуҙы тыйырға! Шулай уҡ балалар порнографияһын тараҡҡан һәм һаҡлаған өсөн енәйәт яуаплылығы булдырырға кәрәк.

Икенсе бер хоҡуҡ яҡлаусы, билдәле адвокат Ш. Горгадзе, ошо өлкәлә енәйәт ҡылыусыларҙы ваҡытынан алда иреккә сығарыуҙы тыйырға кәрәк, тигән фекерен белдерә:

- Ваҡытынан алда азат итеү хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел, - ти ул.- Ә яза сроктары тиҫтәләгән йылдар буйына дауам итергә мөмкин . Ундай әҙәмдәр хатта яза срогын тулыһынса тултырып, иреккә сыҡҡандан һуң да йәмғиәт тормошонан айырып тотолорға тейеш, сөнки бындай төр енәйәттәр 100 проценты менән яңынан ҡабатлана. Мин уларҙы резервацияла торорға тәҡдим итәм. Йоғошло сиргә дусар булғандар кеүек. Элек проказа тигән сир булған, уны нисек еңгәндәр, хәтерләйһегеҙме? Йоғошло ауырыуҙарҙы йәмғиәттән тулыһынса айырып. Чуманы ла шулай бөтөргәндәр. Ә бит педофилия - XXI быуат чумаһы. Уның менән дә ана шулай аяуһыҙ көрәшергә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ОЯҺЫНДА НИ КҮРҺӘ...

## осҡанында шул булыр

**Ҡоштарҙың ығы-зығыһын күҙәтергә яратам мин, уларҙы кешелектең йәшәйеше менән сағыштырам. Ҡоштар яҙмышы менән кеше йәшәйеше киҫешкәндәй тойола. Уларға ла бер ерҙә тупланып йәшәү хас бит. Бигерәк тә ҡарғалар "Күмәкләгән яу ҡайтарған" тигән мәҡәлде беләләрме ни, талашалар, тарҡылашалар, әммә бер урындараҡ оя ҡоралар. Ә бала ҡошсоҡтарын осорға өйрәткәндәрен күҙәтеү үҙе бер ҡыҙыҡ, һоҡланырлыҡ тамаша. Бына ҡайҙа ул түҙемлелек, миһырбанлыҡ, ярҙамсыллыҡ. Хәлһеҙерәк ҡошсоҡтары оса алмайынса ергә ҡолап төшһә, күмәкләшеп ярҙамға киләләр. Әгәр бесәй ҡошсоҡтарға ташланһа, уға уҡ кеүек ябырылалар, ҡасып ҡына ҡотолһон, соҡоп, өҙгөсләп ташламаҫтар тимә! Ҡайҙан уларҙа кешеләргә хас ошондай ыңғай сифаттар? Әлбиттә, был бар тереклеккә бирелгән йәшәйеште дауам итеү инстинкты.**

Кешеләр ҙә тәбиғәт балалары. Тик хәҙерге заман кешеләре бик нык үҙгәрҙе. Үҙ балаларын, йөрәк ярып сыҡҡан сабыйҙарын ҡайҙа етте шунда ҡалдырып китергә лә күп һорап тормай улар. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар ауыҙынан: "Әсәлек капиталын алыр өсөн бала табабыҙ", - тигән һүҙҙәрҙе лә йыш ишетәбеҙ. Башҡа һыймаҫлыҡ хәҡиҡәт! Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: сабый донъяға мөхәббәт емеше булып түгел, ә, ирекһеҙҙән, кемгәлер аҡса йә әсәлек капиталы кәрәк булған өсөн генә ярала. Хоҙайҙың бөйөк ҡанунын боҙоу бит был. Бындай маҡсат менән тыуған сабый, минеңсә, тыумышынан уҡ бәхетһеҙлеккә дусар ителә. Сөнки уның ялыуының маҡсаты аҡса эшләүгә, капитал туплауға ғына ҡайтып ҡала бит. Берүк, ата-әсәләр, ундай балалар үҫеп еткәс, беҙ һине аҡса, капитал өсөн генә тыуҙырҙыҡ, тип әйтә күрмәгеҙ.

Һуңғы ваҡытта ата-әсәләрҙең сабый балаларын ҡалҡан итеп тотоп, үҙҙәренә льгота, һәр төрлө уңайлыҡтар көҫәп йөрөүе ғәҙәтигә әйләнде. Ҡыҫҡаһы, балалар хәҙерге ваҡытта ата-әсәләр өсөн ниндәйҙер маҡсаттарға өлгәшер сараға, ҡоралға ғына әүерелеп бара. Өйҙәрендә ул балалар ниндәйерәк хәлдә йәшәй икән? Тәрбиә-һүҙ урынына аҡырыш та баҡырыш, әрләү-ҡыйырһытыуҙарҙыр инде, тип самалауы ауыр түгел. Үҙ ата-әсәһе ҡаҡҡан-һуҡҡан баланы ситтәр йәлләрме? Бөгөнгө бәләкәй генә йән эйәләре киләсәктә үҙҙәре ата-әсә буласаҡ. Күңелдәренә наҙ орлоҡтары һалынмағас, ҡарт ата-әсәһенә, балаларына нисек буласаҡтарын күҙаллайыҡ. Ни сәсһәң, шуны урырһың. Бөгөнгө көндә ҡарттар йортоноң күбәйеүе лә таяҡтың ике осло булыуына ишара.

Ҡанаты йәрәхәтләнгән ҡошсоғон ташламай, осорорға маташып, бар тырышлығын һалған ҡоштарҙы күҙәтәм. Ата-әсәнең ғәмһеҙлегенән интеккән сабыйҙарҙы ошо ҡанаттары һынған ҡошсоҡ менән тиңләйем. Аяныс хәлдәр. Кеше үҙ балаһының ҡанатын шаҡарып үҙе һындыра. Беҙҙең быуатта балалар йортоноң артыуы, яңы приюттар асылыуы ошо турала һөйләй. Ундағы балалар ситлеккә бикләнгән ҡошто хәтерләтә. Белеүебеҙсә, ситлектәге ҡош ваҡыт үтеү менән һайрауҙан туҡтай, күҙҙәре нурһыҙлана, тирә-йүнгә битараф ҡала. Балалар йорттарында ниндәй генә яҡшы шарттар тыуҙырылмаһын, сабыйҙарҙың яралы күңелен был ғына дауалай алмай. Эстән генә ҡабатлаған "әсәй" һүҙе үҙәктәрҙе өҙә, торналарҙың тыуған яҡ менән хушлашҡанда сыңрағанын хәтерләтә. Торналар иһә ваҡытлыса үҙ ояларына яңынан ҡайтыуына өмөтләнеп, сыңрай-сыңрай хушлаша. Ата-әсә наҙынан, тәрбиәһенән, өй йылыһынан мәхрүм ителгән бәләкәс ҡыҙ-малайҙарҙың һынған ҡанаттарын кем уңалтыр, ел-дауылға ҡаршы талпынырлыҡ көс-ғәйрәтте кем бирер?

**Зәйнәп СОБХАНҒОЛОВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙәге тәүге ҙур һөт байрамы - "Һөт иле - 2011" Бөтә Рәсәй фестивале - 3 сентябрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһында үтә. Фестивалде үткәреү урыны итеп Өфө осраҡлы ғына һайланмаған. Эре мал һаны һәм һөт етештереү буйынса бөгөн Башҡортостан Рәсәйҙә беренсе урында тора. Байрам баш ҡала округы Советы алдындағы майҙанда уҙғарыла. Байрамға килеүселәр төрлө конкурстарҙа ҡатнаша ала.

✓"XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" IV халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы Өфөлә үтәсәк. Сараны Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй ислам университеты һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ойоштора. Конференция эше алты секция сиктәрендә уҙғарыласаҡ. Сара сиктәрендә шулай уҡ "Дәүләт -конфессия-ара мөнәсәбәттәр" һәм "XXI быуатта йәштәр һәм дин" темаларына түңәрәк ҡорҙар планлаштырылған. Конференция 22 сентябрҙә асыласаҡ.

✓8 сентябрҙә Башҡортостандың ҡала һәм район башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәренең семинары үтәсәк. Сарала урындағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлегенең көнүҙәк мәсьәләләре, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу буйынса бурыстар тикшереләсәк. Семинар 9 сентябрҙә Салауат районында дауам итәсәк һәм унда республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарының социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләре тураһында һөйләшеүҙәр буласаҡ.

✓Баш ҡалала спорт профилендәге 5-се Республика мәктәп-интернатында яңы спорт комплексы асылды. Был мәктәптең уҡыусылары һуңғы 12 йыл эсендә 75 тапҡыр донъя, Европа, Олимпия һәм Параолимпия уйындары еңеүселәре булыуға өлгәшкән. Спорт комплексы өс залдан тора. Беренсе залда бокс, грек-рим һуғышы, дзюдо менән шөғөлләнергә булһа, икенсе зал фехтование һәм бадминтонға тәғәйенләнгән һәм тейешенсә йыһазландырылған. Өсөнсө спорт залында буласаҡ спортсылар баскетбол, волейбол, мини-футбол, гандбол төрҙәрендә оҫталығын камиллаштырасаҡ.

✓Был көндәрҙә Өфөлә БР Президенты кубогына хоккей уйындары үтә. Был юлы Континенталь хоккей лигаһында сығыш яһаусы дүрт команда ярыша: "Салауат Юлаев", Магнитогорск "Металлург"ы, Ханты-Мансиҙан "Югра" һәм Түбәнге Каманан "Нефтехимик" командалары.

✓ *Мәктәп йәшендәге балаһы булған бәләкәйерәк ауылда йәшәүселәр оптималләштереүҙең кире яҡтарын үҙ елкәһендә татып өлгөрҙө. Республикала һуңғы өс йыл эсендә 358 мәктәп ябылған, 7 мең тирәһе уҡытыусы эшһеҙ ҡалған.*



ТУҠТА, МӘЛ!


Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты.


Республика башҡорт лицей-интернаты.


Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы.


Республика иҡтисад лицей-интернаты.

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Яңы уҡыу йылы алдынан республиканың һәр районында һәм ҡалаһында мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн август кәңәшмәләре ойоштороу һәм белем биреү өлкәһендә булған проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеү матур бер йолаға әүерелгән. Үткән аҙнала баш ҡалабыҙҙа ла уҙҙы бындай саралар. Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһе лә быйыл Өфөлә үткәрелде. Сарала БР Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй мәғариф академияһы президенты Николай Никандров ҡатнашты.**

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНЫҢ...

## яңы яңылыҡтары

Башҡортостан Республикаһының мәғариф системаһы Рәсәйҙә иң эреләрҙән иҫәпләнә. Республикала 4 меңдән ашыу белем биреү, шул иҫәптән 1771 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы бар. Дөйөм белем биреү мәктәптәре һәм мәктәп-интернаттарҙың иҫәбе - 1817, унда бөгөнгө көндә 437,7 мең бала уҡый һәм тәрбиәләнә. Шулай уҡ республиканың 94 башланғыс һөнәри белем биреү, 76 урта һөнәри белем биреү, 12 юғары белем биреү йорто профессиональ кадрҙар әҙерләү менән шөғөлләнә. Республиканың белем биреү учреждениеларында бөтәһе 860 меңдән ашыу кеше белем ала, педагогтарҙың һәм хеҙмәтләндереүсе персоналдың һаны - 178 мең тирәһе.

Халыҡ араһында шундай шаярыу бар: имеш, хәҙер уҡытыусылар ике тема тураһында һөйләшә. Уларҙың береһе, бөгөнгө көн өсөн бик "модалы" һаналғаны - инновацияларға бағышланған. Икенсеһе традицион - аҡса етмәүгә бәйләнгән. Август кәңәшмәләренең юғары трибуналарынан яңғыраған сығыштарҙы тыңлағандан һуң, ирекһеҙҙән, халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә инде ул, тип уйлап ҡуяһың. Традицион темаһы инде уның мәңгелек, шулай ҙа яйлап хәл ителеү өҫтөндә. БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан дәүләт белем биреү учреждениелары уҡытыусыларының хеҙмәт хаҡы 6,5 процентҡа күтәрелгән һәм беренсе ярты йыллыҡта уның уртаса айлыҡ күләме 12902,5 һум тәшкил иткән. Республикала дөйөм белем биреүҙе модернизациялауға йүнәлтелгән саралар комплексына ярашлы, 1 сентябрҙән уҡытыусыларҙың эш хаҡы уртаса 30 процентҡа күтәреләсәк. Республика август кәңәшмәһенең пленар ултырышында БР Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, был маҡсатта республикаға федераль үҙәктән 700 млн һум аҡса күскән дә инде, бынан тыш, 111 млн һумды республика ҡаҙнаһы бүләсәк. Мәктәптәрҙең матди базаһын яҡшыртыуға республика 900 млн һум аҡса тотонған. Президент әйтеүенсә, был саралар барыбер әле мәктәптең матди торошон яҡшырта алмай. Әлеге көндә республика мәктәптәренең 12-һе авария хәлендә, уларҙың яртыһында йыһазландырылған аҙыҡ блоктары, санитар узелдар, һәр унынсы мәктәптә спорт залдары юҡ.

Мәғариф өлкәһендә һәр йыл һайын ниндәйҙер үҙгәрештәр булып тороуы, уның тәжрибәләр майҙансығына әүерелеп бөтөүенә лә күнектек шикелле. Республиканың төп педагогик кәңәшмәһендә әйтелеүенсә, мәктәптәр селтәрен оптималләштереү, дөйөм һәм һөнәри белем биреүҙе модернизациялау, һәр кеше өсөн белем алыу мөмкинлеген булдырыу, инновацион иҡтисад һәм социаль сфера өсөн эшсе кадрҙар һәм белгестәр әҙерләүҙең сифатын күтәреү буйынса эштәр быйылғы уҡыу йылында ла дауам итәсәк. "Инновация", "модернизация" кеүек модалы терминдарҙың да мәғәнәһен төшөнгәндәрҙән төшөнмәүселәр күберәктер, бәлки, әммә мәктәп йәшендәге балаһы булған бәләкәйерәк ауылда йәшәүселәр оптималләштереүҙең кире яҡтарын үҙ елкәһендә татып өлгөрҙө. Республикала һуңғы өс йыл эсендә мәғариф өлкәһендә сараларҙы һөҙөмтәле ҡулланыу маҡсатында 623 мәктәп үҙгәртеп ҡоролған, 358 мәктәп ябылған, 20 мең хеҙмәткәр, шул иҫәптән 7 мең тирәһе уҡытыусы эшһеҙ ҡалған. "Әммә был белем биреүҙең сифатын күтәреүгә һәм сараларҙың һөҙөмтәлерәк ҡулланыла башлауына килтермәне, - тине Рөстәм Зәки улы. - Республика мәктәптәренең яҡынса 80 проценты ауылдарҙа булыуын иҫәпкә алып, бер уҡытыусыға тура килгән балалар һанын билдәләүҙә норматив ҡулланыуҙы һорап, РФ Хөкүмәте рәйесе Влади-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓4 сентябрҙә Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромында Европаның йәш һыбайлылары XXVI чемпионаты уҙасаҡ. Чемпионатта UET берҙәмлегенә ингән 12 ил вәкилдәре ҡатнашасаҡ.

✓Үткән шәмбе Өфөнөң Спорт һарайы алдындағы майҙанда "Үҙебеҙҙекенән етеш! Үҙебеҙҙекен ал!" девизы аҫтында тәүге көҙгө йәрминкә ойоштоланды. Йәрминкәлә Иглин районынан 30-ға яҡын крәҫтиән (фермер) һәм шәхси хужалыҡтар ҡатнашты. Улар 20 тонна һуған, 10 тоннаға яҡын бал, 3 тонна ит, 5 тоннанан ашыу йәшелсә һәм емеш-еләк, башҡа төр ауыл хужалығы тауарҙары алып килгәйне. Матур йолаға әүерелгән сарала Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та булды, халыҡ менән аралашты.

✓В.И. Лениндың йорт-музейы сентябрҙән алып яңы эш режимына күсте. Ул шишәмбенән шәмбегә тиклем иртәнге 10-17 сәғәттәрҙә эшләй. Йәкшәмбе һәм дүшәмбе көндәрендә ял итә. Адресы: Достоевский урамы, 78.

✓БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Азат Ҡотләхмәтов әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа ҡаланы йәшелләндереү маҡсатында тиҙ үҫеү һәләтенә эйә булған тирәктәр күпләп ултыртылған. Әммә был ағастарҙың тиҙ ҡартайыуы иҫәпкә алынмаған. Улар бөгөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Шуға ла баш ҡалала йыл һайын йөҙәрләгән тирәк ҡырҡыла. Өфө ҡалаһы хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығына өй алдарындағы тирәктәрҙе бысыу буйынса ғариза менән мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓Баш ҡалала эшһеҙлек кимәле 1,63 процент тәшкил итә. Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә рәсми рәүештә 9 мең кеше эшһеҙлек буйынса сиратта торһа, ҡаланың ойошма-предприятиеларында вакантлы 15500 эш урыны бар. Үткән аҙнала үҙәк аша 300 кеше эшкә урынлашҡан.

✓Тиҙҙән Түбәнге Новгородта Волга буйы федераль округының туристик ресурстары фестиваль-презентацияһы үтәсәк. Был сара алдынан www.kurortrussia.ru туристик порталы интерактив һорау алыу үткәрә. Унда һәр кем Волга буйы федераль округының 14 төбәге араһынан иң яҡшыһы өсөн тауыш бирә ала. Әлегә Башҡортостан, Татарстан һәм Пермь өлкәһе лидерҙар рәтендә. Тауыш биреү 4 сентябргә тиклем дауам итәсәк.



Айрат Кирәев фотоһы.

мир Путинға мөрәжәғәт иттем. Был һорауға әлегә ыңғай яуап алынды һәм был үҙгәрештәр көҙөн Рәсәй Хөкүмәтендә ҡарауға сығарыласаҡ".

Өфө ҡалаһының мәғариф идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, баш ҡалала бер уҡытыусыға 15 уҡыусы тура килә, мәктәптәр - 24,8, гимназиялар тағы ла күберәк класс-комплект йыя ала. Ә ауыл ерендә икешәр-өсәр параллель кластар заманы күптән үткән инде. Шуға ла Рөстәм Хәмитовтың ауыл уҡытыусыһы өсөн - 8, ҡала ерлегендә эшләүселәр өсөн 15 уҡыусы иҫәбен билдәләргә тигән тәҡдиме педагогтар тарафынан ыңғай ҡабул ителде. Был, һис шикһеҙ, мәктәптәребеҙҙе һаҡлап ҡалырға ла булышлыҡ итер ине, тик әле ябылып өлгөргән һәм ябылыу өҫтөндә торған белем усаҡтары кире үҙ ишектәрен асырмы икән?

Уҡыусыларҙы ғына түгел, ә уларҙың ата-әсәләрен, уҡытыусыларын йүгертергә мәжбүр иткән Берҙәм дәүләт имтихандары тураһында ла һүҙ булды конференцияла. Республика етәкселеген уның ыңғай йәки кире яҡтары түгел, ә республиканың БДИ буйынса дөйөм балдарының уртаса Рәсәй балдарынан күпкә юғарыраҡ тороуы нығыраҡ борсой бөгөн. Президент баһаларҙы яһалма рәүештә күтәреүҙең системалы характер ала барыуын билдәләне һәм йыл һайын юғары балға тапшырыуға "өлгәшкән" район һәм ҡалаларҙы ла атаны. Илеш, Саҡмағош, Шишмә, Балтас, Кушнаренко, Бүздәк, Йәрмәкәй райондары һәм Ағиҙел ҡалаһы БДИ һөҙөмтәләре буйынса исемлектең алдынғы урындарын биләһә, Йылайыр, Көйөргәҙе, Мәсетле, Дыуан, Стәрлетамаҡ, Мишкә, Хәйбулла, Ҡалтасы, Бөрө райондары БДИ буйынса насар һөҙөмтәләр күрһәтә. "Артыҡ юғары балдар республика вуздарына уҡырға инеү балын да күтәрә, һөҙөмтәлә, БДИ-ла ғәҙел баһа алған абитуриентҡа уҡырға инеү ауырлаша", - тине Рөстәм Хәмитов. Быйылдан Мәғариф министрлығы һәм вуз ректорҙары советы юғары уҡыу йортона юғары балдар менән уҡырға ингән студенттарҙың өлгәшеү мониторингын үткәрәсәк һәм киләсәктә был эште даими күҙәтеп торасаҡ.

Мәктәптәрҙә туған телде өйрәнеү ҙә бөгөн көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Башҡортостанда туған тел булараҡ бөтәһе 14 тел өйрәнелә, 695 белем биреү учреждениеһында 6 телдә белем бирелә. Әммә мәктәптәрҙә туған телен өйрәнергә теләүселәрҙең кәмей барыуын сәйәсиләштерергә кәрәкмәй, тине республика Президенты һәм был проблеманың милли мәсьәләгә ҡатнашлығы юҡлығын белдерҙе. Бында төп сәбәп булып тел буйынса ун, хатта егерме йыл элек төҙөлгән программаларҙың балалар өсөн ҡыҙыҡ булмауында күреүен әйтте. Төптән уйлап ҡараһаң, райондарҙа башҡорт телен өйрәнеү буйынса проблема бер ҡасан да булманы, Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа ла тел уҡытыу күптән яйға һалынған. Шуға ла хәҙер тел мәсьәләһен күтәреү хатта урынһыҙ ҙа тойолған кеүек. Ә уҡытыуҙың методикаһын үҙгәртеү һәм яңы программалар төҙөү кәрәклеге тураһында күптән билдәле, шуға ла был йәһәттән ниндәйҙер үҙгәрештәр буласағына ышаныс бар. Әйткәндәй, яңы белем биреү стандарттарында туған телдәр федераль компонентҡа индерелгән. Тимәк, туған телдәрҙе уҡытыу дәүләт тарафынан яҡланасаҡ.

Шулай ҙа яңы уҡыу йылының иң ҙур реформаһы беренсе класҡа уҡырға барыусыларға ҡағыла. Уларҙың барыһы ла яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттары шарттарында парта артына ултырасаҡ. Белгестәр әйтеүенсә, яңы стандарттар хәҙер баланы белемле итеүгә генә түгел, ә уны шәхес итеп тәрбиәләү мөмкинлеге лә бирәсәк. Быйыл шулай уҡ белем биреү учреждениеларын яңы ойоштороу-хоҡуҡи формаһына күсереү ҡаралған. Закон буйынса, хәҙер бюджет белем биреү учреждениелары дәүләт тарафынан өлөшләтә генә финансланасаҡ. Эксперттар был закондың башлыса административ, ойоштороу характерындағы документ икәнлеген билдәләне лә инде. Шулай итеп, Дмитрий Медведевтың яңы мәктәп төҙөү тураһындағы изге маҡсаты һәм ниндәйҙер түләүле хеҙмәткә, иҡтисадҡа ҡайтып ҡалған идея араһында ҡапма-ҡаршылыҡ килеп тыуҙы. Балалар баҡсаһынан уҡ өҫтәмә хеҙмәттәр өсөн түләй алған бай балаһы һәм улар өсөн түләй алмаған ярлы балаһына бүленгән мәктәп уҡыусыһынан ниндәй шәхес тәрбиәләргә тырышабыҙ һуң улай булғас?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр система, ул ниндәй генә көслө һәм ышанысды булмаһын, даими рәүештә үҙгәрештәргә дусар булыуҙы күтәрә алмай. Ул яйлап емерелә, юҡҡа сыға. Ҡайһы саҡта мәғариф өлкәһен реформалаштырыу системаны яҡшыртыу өсөн түгел, ә реформа кәрәк булған өсөн генә уҙғарыла кеүек тойолоп китә. Совет осорондағы мәктәптәрҙәге, вуздарҙағы белем биреү системаһы менән бөтөн донъяла һоҡланһалар, белем биреүҙең системалы, иң мөһиме, бушлай булыуы менән илебеҙ халҡы ғорурлана ине. Ә хәҙер сит илдәрҙең тәжрибәһенә таянып яһалған реформалар һөҙөмтәһендә быларҙың барыһының да юҡҡа сығыуы ихтималлығы түгел, ә тағы ла мәғәнәһеҙерәк закондар ҡалҡып сығыуы ҡурҡыта халыҡты. Әйткәндәй, "Мәғариф тураһында"ғы яңы закон проекты тирәһендә шау-шыу баҫылып та өлгөрмәне, матбуғат баҫмаларында Рәсәй мәғариф министры Андрей Фурсенконың быйылғы уҡыу йылында БДИ тапшырыу ҡағыҙҙәләрен үҙгәртеү һәм ҡатмарлаштырыу, урта мәктәптең хәлен яҡшыртыу кәрәклеге тураһындағы иғландары яңғырай ҙа башланы. Тимәк, мәғариф өлкәһендә тағы ла үҙгәрештәр буласаҡ әле.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ЭШҺЕҘ БУЛАРАҠ ТҮЛӘНӘ

**"Ғариза яҙып, эшемдән сыҡҡас, ауырға ҡалғанлығымды белдем. Хәҙер миңә декрет һәм пособие аҡсаһы нисек түләнәсәк? Эшләгән саҡтағы эш хаҡым иҫәпкә алынырмы, әллә эшһеҙ булараҡ хисапларҙармы?"**

- Хәҙер һеҙ эшһеҙ булараҡ ҡына пособиеға һәм түбәндә килтерелгән түләүҙәргә өмөт итә алаһығыҙ:

- эш биреүсе эшмәкәрлеген ябыу йәғни туҡтатыу менән бәйле эштән сығарылғандар өсөн йөклөлөк һәм бала табыу буйынса айлыҡ пособие - 438,87 һум;

- йөклөлөктөң тәүге осорҙарында (фәҡәт ойошма бөтөрөлөү менән бәйле эштән сыҡҡандар һәм көндөҙгө бүлектәр студенттары өсөн) бер тапҡыр түләнә торған пособие - 438,87 һум;

- бала тыуғандан һуң бер тапҡыр түләнеүсе пособие 11 703, 13 һум;

- йәш ярымға тиклемге баланы ҡараған өсөн ай һайын түләнеүсе айлыҡ минималь пособие тәүге баланы ҡараған өсөн - 2194,34 һум, икенсе һәм унан һуңғы балаларҙы ҡараған өсөн 4388,67 һум.

## ИҪӘПЛӘҮҘЕ ҮҘЕҢ ҺАЙЛА

**"Сабыйым менән декрет отпускыһында ултырам, икенсе балабыҙҙы көтәбеҙ. Пособие тулы күләмдә иҫәпләнһен өсөн миңә бер көнгә генә булһа ла эшкә сығырға кәрәкме икән?"**

- Эшкә сығып тормаһағыҙ ҙа була - был бер нәмәгә лә йоғонто яһамаясаҡ. Шуны ғына иҫтә тотоғоҙ: 2011 йылда һеҙ үҙегеҙҙең уртаса эш хаҡын, һеҙгә түләнәсәк пособиеның ниндәй осраҡта күберәк килеп сығыуын күҙҙә тотоп, яңы йәки иҫке ҡағыҙәләр буйынса иҫәпләүҙе һайлай алаһығыҙ. Әгәр һеҙҙең страховкаланған стажығыҙ 6 айҙан күберәк булһа, пособие бынан алда декретта булыуығыҙ сәбәпле, яңы декрет алдынан эшләмәүегеҙҙе иҫкә алып, тәүге декрет алдынан ошо уҡ эш биреүселә эшләгән саҡтағы һуңғы 12 календарь айҙағы уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә.

2011 йылдан пособие иҫәпләүҙең яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә инде. Хәҙер пособие күләме башҡа эш биреүселәрҙә эшләгәнде лә иҫәпкә алып, декретҡа тиклемге ике календарь йылдың уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә. Ошо ике йылдың береһендә һеҙ йөклөлөк йәки бала табыу буйынса отпускыла йәки бала ҡарау буйынса отпускыла булған хәлдә, уртаса эш хаҡын иҫәпләү маҡсатында тейешле календарь йыл һеҙҙең ғариза буйынса пособие күләмен арттырыу шарты менән алдағы йылдарҙың эш хаҡына алмаштырыла ала.

## ҺӘР САБЫЙ - ҮҘ РИЗЫҒЫ МЕНӘН

**"Игеҙ балалар тыуған хәлдә декрет аҡсаһы һәм бала ҡараған өсөн пособие икеләтә күләмдә иҫәпләнәме?"**

- Әгәр игеҙ балаларығыҙ донъяға килһә, һеҙгә бала тапҡанға тиклем һәм унан һуңғы осорға бер бала өсөн тейешле 70 көнгә түгел, ә бала тыуғанға тиклем 84 һәм бала тыуғандан һуң 110 календарь көнгә пособие иҫәпләнә. Йәш ярымға тиклемге бала (әгәр игеҙәктәр тәүге балаларығыҙ булһа) ҡараған өсөн айлыҡ минималь пособие 6583,01 һум (2194,34 + 4388,67) тәшкил итәсәк, сөнки игеҙәктәрҙең береһе - тәүге, һыңары икенсе бала тип ҡараласаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Ҡырҡҡолас, ҡырҡъяпраҡ



Ҡырҡҡолас (кровохлебка) тамырын сентябрь айында ҡаҙып алып, һалҡын һыу менән йыуып, турап, киптереп алырға кәрәк. Мейестә йәки духовкала 40-50 градус йылыла киптерергә ярай. Әҙер тамырҙы сепрәк тоҡсайға һалып һаҡлаһаң, ул 5 йыл яраҡлы була.

Ҡырҡҡолас үләне микробтарға ҡаршы бик яҡшы дауа. Эс йомшарып киткәндә был үләндең тамырын эсеп алһаң, тиҙ йүнәлеп китерһегеҙ. 1 ҡалаҡ ваҡ ҡына итеп туралған ҡырҡҡолас тамырын 1 стакан ҡайнар һыуҙа 10 минут ҡайнатҡас, 1 сәғәт төнәтергә лә, һөҙөп, көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

Ошо ысул менән эшләнгән төнәтмә менән теш ҡаҙнаһы ялҡынһыныуын, ауыҙ ҡыуышлығының башҡа ауырыуҙарын бөтөрөргә була. Бының өсөн төнәтмә менән ауыҙҙы көнөнә бер нисә тапҡыр сайҡатырға кәрәк. Көнөнә өс тапҡыр берәр балғалаҡ эсһәң, йөрәк эшмәкәрлеге яҡшыра.

## Сәй бәшмәге

Сәй бәшмәген сайҡатып, таҙа 3 литрлы банкаға һалғас, ҡайнап һыуытылған һыуҙы банканың ситенән генә ипләп кенә ҡойорға ла, 1 стакан шәкәр ҡомо өҫтәп, 2-3 тәүлек тоторға. Һуңынан һөҙөргә һәм эсергә. Сәй бәшмәге шәкәр ашап йәшәй, шуға уға сәй бешерелмәгән ябай һыу ҡойорға ла ярай. Кеүәҫ урынына эсәһең, шәкәрен аҙ һалһаң, тәмһеҙ була. Был эсемлек бигерәк тә ашҡаҙан әселеге түбән булған кешеләр өсөн файҙалы. Ғәҙәттә, түбән әселек яман шеш күҙәнәктәре менән көрәшә алмай, ә сәй бәшмәге уларҙы юҡҡа сығара. Сәй бәшмәген йыш эсергә ғәҙәтләнеүселәрҙә яман шеш бөтөнләй булмай. Ашҡаҙан әселеге юғары булһа йәки панкреатит менән яфаланһығыҙ, сәй бәшмәге эсемлеге ҡулланыу ярамай.

## Иммунитет күтәреү

Организм яҙлы-көҙлө төрлө ауырыуҙарға бирешеүсән булып китмәһен өсөн сәйгә кейәү үләне (чабрец), мәтрүшкә, һары мәтрүшкә ҡушып эсергә кәрәк. 10 көн эскәндән һуң организмды ял иттереп алығыҙ һәм курсты тағы ҡабатлағыҙ.

4 стакан кефирға 100-150 грамм бешкән ҡабаҡ, 1 ҡалаҡ бал ҡушып болғатып эсеп торһаң да иммунитет яҡшыра, хәл инеп ҡала. Был эсемлек эсәктәрҙең эшмәкәрлеген дә яҡшырта.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Республикабыҙҙа оптималләштереү менән бәйле йыл һайын тиҫтәләгән мәктәп ябыла. Тәү сиратта бәләкәй ауылдар мәктәпһеҙ ҡала. Был ғаиләгә генә ҡыйынлыҡ килтермәй, ауылдың киләсәгенә, яҙмышына йоғонто яһай.***

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...



# ЙӘШ КЕЙӘҮГӘ НӘСИХӘТТӘР

## Ир - ир урынында булһын

**Сөбханалла, бөгөн һин Хаҡ Тәғәләбеҙ ҡушҡан изге ғәмәл- никах ғәмәлен башҡарҙың, һәм ошоноң менән үҙең, ата-әсәң, ҡанбабаларың, Раббыбыҙ алдында кәләшең, тыуасаҡ балаларың өсөн яуаплы бурыс алдың. Ошо бурыстарыңды үтәүҙә хаҡ мосолман тәҡүәлеге, камил аҡыл, үткер зиһен, тулы иман бирһен Аллаһыбыҙ.**

Ислам ҡатын-ҡыҙға ҡарата гүзәл мөнәсәбәт талап итә, һәм уны һис бер диндә булмаған бейеклеккә күтәрә. Әсәләргә, ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәттең иң камил өлгөләрен беҙ бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһи-вәссәләм хәҙистәренән күрәбеҙ.

Исламда никах хайуани хистәрҙән юғары тора, ғаилә башлығы сабырлығы, шәфҡәтлелеге, өй эсендәге ваҡ-төйәк етешһеҙлеккә иғтибар итеп бармауы, асыуын тыя белеүе, киң күңеллелеге менән айырыла. Хатта ҡатынының диндән сыҡмай торған ваҡ-төйәк етешһеҙлектәренә лә бик иғтибар итмәй, матур яҡтарын күрергә тырыша.

Өйөнә йылмайып ҡайтып инер, ҡатынын, балаларын матур мөғәмәлә менән Аллаһ исеме менән сәләмләр. Уның ҡайтыуын яҙ килеүе, шатлыҡ, бәхет өҫтәлеп килеүен көткән төҫлө көтөрҙәр.

Ҡатынына ярҙам кәрәген күрһә, булышыр, нимәгәлер зарланһа - йыуатыр, аңлатыр. Ир кешенең йән сихәте, ғишыҡ-ғишрәте үҙ хәләл ефете менән генә булырға тейеш. Уйнаш - кеше үлтереүгә тиң оло гонаһтарҙан һанала. Ҡатыны ире янында үҙен яҡлаулы, һөйөклө итеп тойһон.

Шәриғәт ҡушҡан сиктәрҙә ир матур кейенергә, бөхтә булырға, мөхәббәтлелеген юғалтмаҫҡа тырышырға бурыслы. Ирҙең ҡатынына хаҡы булған кеүек, ҡатындың да иренә хаҡы бар. Эш, дуҫ-иш - үҙ урынында, ғаилә иһә - төп урында. Ғаилә хәле теҙөк булмаған, сәй һәм мәйханаларҙа бушҡа ғүмер, мал сарыф итеүгә ғәҙәт ҡылған милләттә оят һәм нәҫел дауамы бөтөү ихтималы бар, тип иҫкәрткән олуғ ғалим, мәғрифәтсе Ризаитдин бине Фәхретдин.

Ғаилә эсендәге хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы мәсьәләләргә бөйөк мәғрифәтсе, исламиәт белгесе булараҡ, ентекле байҡау яһай, аңлатмалар бирә. Мәҫәлән, Хәҙис шәрифтән ул ошондай тәржемәне миҫалға килтерә: "Әҙәмдәрҙең яуызы үҙенең ғаиләһенә (ҡатын һәм балаларына) ашау-эсеү, кейем-һалым тураһында үә башҡа мөғәмәләләрҙә ғәҙәттән тыш тығыҙлыҡ ҡылыусы кешеләр".

"Беҙ, мосолмандарҙа, ир менән ҡатын араһында булған мөнәсәбәттәр хужа менән хеҙмәтсе араһындағы мөнәсәбәттән күп йәһәттән айырым була, - тип яҙа ғалим. - Хужа менән хеҙмәтселәр араһында булған балаларҙың яҡшы тәрбиә күреүе мөмкин түгел".

Ире өйгә ҡайтып ингәндә ҡатыны, балалар ҡурҡып, ҡалтыранып, унда-бында ҡаса башлаһа, сығып китеүе менән улар иркен тын алып шатланһа, рәхәтлек кисерһә - был кешене яуыз тимәй, ни тиһең.

Ғаилә төҙөк булыуға беренсе сәбәп - ир булған кеше ҡатынын үҙенә иптәш, үҙе юҡта үҙ урынында тороусы хужа тип белергә, өй идараһын бөтөнләй уға тапшырырға үә иркенлек бирергә тейешле, тип яҙа Ризаитдин бине Фәхретдин.

Ғаиләлә берлек һәм мөхәббәт хөкөм һөрөргә тейеш. Әфәндебеҙ Мөхәммәт ғәләйһи-вәссәләм: "Һеҙҙең хәйерлегеҙ -ҡатындарығыҙ өсөн хәйерле булғанығыҙҙыр", - тигән.

**Гүзәл СИТДИКОВА.**
**(Дауамы бар).**

ЗАМАН ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ

**Көҙгө таң офоҡ өҫтөн һыҙып, мөғжизәле тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан ауылды нурға сорнай. Иртәнең һалҡын да, быуындарҙы сихри көс менән йомшартҡан татлы ла тыны иркен йорттарға бәреп инә. "Тор, балам, тор, юҡһа, автобусҡа һуңлап ҡуйырһың", - әсә кеше шулай тәмле йоҡоһонан айырылырға теләмәгән ете йәшлек балаһын уята. Быға са таң һарыһынан тороп өйрәнмәгән кескәй күҙҙәрен тырнай-тырнай көс-хәлгә карауатынан ҡуҙғала. Үҙе һаман да әле йоҡо ауында. Ни өсөн автобусҡа өлгөрөргә кәрәк һуң? Ә, ул хәҙер мәктәпкә йөрөй бит әле. Шуға көн дә иртә менән мәктәп автобусына сығырға кәрәк...**



# МӘКТӘБЕ ЯБЫЛҒАС...

## ауылдар ҙа юҡҡа сығыр бит

Был үткән дәүерҙе һүрәтләгән ниндәйҙер хикәйәнән өҙөк түгел, был - бөгөнгө ысынбарлыҡ. Балаларҙың, шул иҫәптән, беренсе класс уҡыусыларының сит ауылдарға йөрөп белем алыуы ғәҙәти күренешкә әйләнеп бөтөп бара. Шулай ҙа ата-әсәләрҙең бәләкәй балаһына, автобусҡа һуңлайһың, тип өндәшеүе барыбер ҡолаҡҡа ятмай, был өндәшеүҙә ниндәйҙер йән өшөткөс мәғәнә лә йәшеренгән кеүек.

Республикабыҙҙа оптималләштереү менән бәйле йыл һайын тиҫтәләгән мәктәп ябыла. Тәү сиратта бәләкәй ауылдар мәктәпһеҙ ҡала. Мәктәп ябылыуы ғаиләгә генә ҡыйынлыҡ килтермәй, ауылдың киләсәгенә, яҙмышына йоғонто яһай. Бындай ҙур һәм көнүҙәк проблема Учалы районын да урап үтмәне. Йыл да бер нисә мәғариф учреждениеһының эшмәкәрлеге сикләнә килә. Белем усағының байтағын, ғәҙәттә, шундай яҙмыш көтә: башта урта мәктәпте төп белем биреү уҡыу йортона әйләндерәләр. Уға филиал статусын бирәләр. Аҙаҡтан ул башланғыс мәктәп итеп ҡалдырыла. Бер нисә йылдан мәктәп эшмәкәрлеген ваҡытлыса туҡтатыу тураһында ҡарар сығарыла. Етәкселек тарафынан, уҡыу йортон бөтөнләй ябыу тураһында һүҙ бармай, тип әйтелһә лә, ысынбарлыҡ башҡа - элекке йылдарҙа эшен туҡтатҡан мәктәптәр ҡабаттан асылманы. Бөгөн 80 ауылдан торған районда ике тиҫтәгә яҡын урта мәктәп иҫәпләнә, уның тиҫтәнән ашыуы - ҡалала. 4 үҙаллы туғыҙ йыллыҡ мәктәп эшләй. Башҡа төп белем биреү уҡыу йорттары филиал булып тора. Мәғариф системаһын оптималләштереү сиктәрендә быйыл 5 башланғыс мәктәп ябылды. Хәҙер Һөләймән, Ишкен, Ыҫтамғол, Оҙонгүл ауылы балалары күрше ауыл мәктәптәрендә уҡыясаҡ. Бынан тыш, мәғариф бүлеге начальнигы Ләйсән Фазлетдинова әйтеүенсә, Һәйтәк, Ҡалҡандағы мәктәптәр башланғыс мәктәп итеп ҡалдырыласаҡ. Етәксе һүҙенә ҡарағанда, бындай аҙымдар балаларға сифатлыраҡ белем биреү маҡсатынан яһала, имеш.

- Оптималләштереүҙең төп маҡсаты һәм асылы - уҡытыу-тәрбиә эшен сифатлы ойоштороу, ә уҡытыусыларҙы эштән бушатыу, мәктәп эшмәкәрлеген туҡтатыу түгел, - ти Ләйсән Нурмөхәмәт ҡыҙы. - Бөтәһе лә белә: бөгөн мәғариф өлкәһен модернизациялау бара. Беҙ яңы федераль дәүләт белем биреү стандарттарына күсәбеҙ. Уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороу буйынса мәғариф хеҙмәткәрҙәре алдында бик етди талаптар ҡуйыла. Мәктәптәр санитар-гигиена нормаларына ярашлы булырға тейеш. Әйтәйек, бер балаға 2,5 квадрат метр майҙан тура килергә тейеш. Башланғыс кластарҙа физкультура дәрестәренә өс сәғәт ҡаралған, йәғни мәктәптәрҙә спорт залдарын булдырыу - төп талаптарҙың береһе. Шулай уҡ бала мәктәпкә килеү менән информатика, инглиз теле дәрестәрен үҙләштерә башлай. Быңың өсөн һәр мәктәптә компьютер, тейешле белгестәр булырға тейеш. Үҙенән-үҙе аңлашыла: әгәр ҙә мәғариф учреждениеһында, әйтәйек, 4 синыфлыҡ программа буйынса 6 бала уҡый икән, педагог, ниндәй генә талантлы булмаһын, бер үк ваҡытта бөтә синыф дәрестәрен дә алып бара алмай.

Мәғариф бүлеге етәксеһе әйтеүенсә, районда уҡыуға йәлеп ителмәй ҡалған бала юҡ. Сит ауылдарҙа белем алған уҡыусыларҙың барыһын да мәктәп автобустарында йөрөтөп уҡыталар. Уҡытыусыларҙы эшкә урынлаштырыу мәсьәләһе хәл итеү өҫтөндә.

- Быйыл шулай уҡ яңы санпин талаптары индерелде, - ти Ләйсән Нурмөхәмәт ҡыҙы, мәктәптәрҙең ябылыу сәбәбен аңлатып. - Мәғариф учреждениеһына мотлаҡ һыу үткәрелергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был талапты әлегә бөтә мәктәптәрҙә лә үтәй алманыҡ. Ҡалҡан, Һәйтәктә был эште башҡарып сығырға аҡса етмәне. Шундай уҡ сәбәп менән биш башланғыс мәктәп тә ябылды. Ҡарт Муйнаҡ ауылы Туңғатарға яҡын. Унда иһә мәктәп яңы, уҡыу шарттары бик яҡшы. Урындағы халыҡ үҙе, мәктәп төҙөү мәсьәләһе ҡуҙғатылғанда, белем усағын ике ауыл өсөн булдырыуҙы һорап, Башҡортостан Мәғариф министрлығына хат яҙғайны. Ишкен, Ыҫтамғол мәктәптәре киләсәктә, бәлки, асылыр. Оҙонгүл мәктәбе бөтөнләй санпин талаптарына тура килмәй, - тип аңлатты Л. Фазлетдинова.

Шул уҡ ваҡытта район-ҡала мәктәптәрен төҙөкләндереүгә быйыл байтаҡ аҡса бүленгән. Муниципаль бюджеттан - 15 миллион, республика, федераль ҡаҙнанан бүленгән 6-шар миллион һум аҡса уҡыу йорттарын ремонтлауға киткән. Сумманың байтағы янғынға ҡаршы сигнализация, йылытыу счетчиктарын ҡуйыу, ҡаҙанлыҡтарҙы алыштырыу, һыу үткәреү өсөн файҙаланылған. Ремонт эштәре иһә күбеһенсә ҙур мәктәптәрҙә үткәрелгән. Беҙ үтә мохтаж булған мәғариф учреждениеларын иғтибар үҙәгенә ҡуйҙыҡ, ти етәкселәр. Бәлки, аҡсаның бер өлөшөн ике мәктәпте булһа ла һаҡлап ҡалыу өсөн ҡулланырға булмаҫ инеме икән?

Балаларҙың ҙурыраҡ мәктәптәрҙә уҡыуының ыңғай яҡтары күп, әлбиттә. Ләкин был башлыса урта, өлкән синыфтарға ҡағыла. Ә 1-4-се класс уҡыусыларының белем кимәле икенсе мәктәпкә йөрөүгә бәйлеме икән? Һөләймән мәктәбендә, мәҫәлән, балалар башҡа мәктәп уҡыусыларынан ҡалышмай уҡып килгән. Информатика дәрестәре өсөн компьютер, спорт инвентарҙары булған. Инглиз теле уҡытыусыһы килеп дәрестәр үткәргән.

- Беҙҙе артта ҡалған мәктәп, тип әйтерлек түгел ине. Яңы стандарттар буйынса ла уҡытырға мөмкинлек бар ине, тип иҫәпләйем. Бина мәктәп өсөн ҡулай түгел, сөнки бер өлөшөндә ғаилә йәшәй, ә был надзор органдары тарафынан ҡырҡа тыйыла, тип яптылар беҙҙе. Ләкин алдағы йылдарҙа ла ошолай эшләп килә инек бит, - тип һөйләй уҡытыусы Рәйсә Мөхәмәтйәрова. - Ә хәҙер бында фельдшер-акушер пункты асырға уйлайҙар. Бындай күренеш ике йөҙлөлөк тураһында һөйләй түгелме? Мәктәпте япҡас, унда ФАП та эшләргә тейеш түгел бит, асылда.

Эйе, мәктәпте ябып, йәшәйем тип тырышып ятҡан ауыл халҡының дәртен һүндерәләр. Һөләймән - "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан берҙән-бер ауыл. Был халыҡтың әүҙемлеге, яҡшы тормошҡа ынтылыуы тураһында һөйләй. Ә кешеләре яҡшы булған ауылға ситтән дә халыҡ ағыла бит, ауыл үҫә. Һөләймәндә йәш ғаиләләр ишле генә. Киләһе йылдарҙа уҡыусылар һанының да артыуын көткәндәр. Мәктәптең ябылыуы иһә ошо ыңғай күренештәргә кире йоғонто яһауы ихтимал.

Ишкен мәктәбендә уҡытҡан Мөнирә Дәүләтшина ла ауылының киләсәге өсөн борсола.

-Мәктәпте япҡастар, ауыл бөтә тип көйөп кителде. Күңел әрнеп тик тора, - ти ул. - Ата-әсәләр ҙә бындай ҡарарға ҡаршы. Улар һаман да өмөттәрен өҙмәй. Бәлки, мәктәп эшләр, тигән ышаныста йөрөйҙәр. Ә бина бик яҡшы. 2004 йылда реконструкция эшләгәйнеләр. Мәктәпте япҡанда, һыу үтмәгән, балалар һаны әҙ, бер педагог уҡыусыларға төплө белем бирә алмай, тигән сәбәптәрҙе килтерҙеләр. Минең ҡарашҡа, ауылда уҡыу йортоноң булмауы барыбер дөрөҫ түгел. Бәләкәс балаларҙы, бигерәк тә 1-се класс уҡыусыларын йәлләйем...

Мөнирә Сарим ҡыҙы әйтеүенсә, мәктәп ябылыу сәбәпле, өс балалы йәш ғаилә ҡоролған нигеҙенән айырылып, Учалы ауылына күсеп киткән. Өс бала ла мәктәпкәсә йәштә, ата-әсә уларҙың киләсәген

уйлап, шундай аҙым яһарға мәжбүр булған. Етәкселәрҙең, уҡыусылар һаны әҙ, тигән һылтау менән белем усағын ябыуҙары "Мәғариф тураһында"ғы законға ҡаршы килә. Балалар һаны мәктәптең ябылыуына сәбәпсе була алмай. Был осраҡта чиновниктар уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең хоҡуғын боҙа.

Нәзифә Хәмиҙуллинаның ике балаһы башланғыс класта уҡый. Ул да белем усағының ябылыуына ризаһыҙлыҡ белдерә:

- Балалар 10 километр йыраҡлыҡҡа йөрөп уҡыясаҡ бит инде. Бәләкәйҙәренең дәрестәре иртә бөтһә лә, сәғәт 3-кә, 4-кә тиклем автобусты көтәләр, сөнки өлкән класс уҡыусыларының дәрестәре һуңыраҡ тамамлана. Баланың мәктәптән арып ҡайтып, өйгә эште эшләргә хәле лә, ваҡыты ла ҡалмай. Хөкүмәт нисек кенә тырышмаһын, ауылда ҡала шарттарын булдырып булмай. Бәҙрәф бина эсендә булырға тейеш, тип баралар. Элек беҙ ҙә ауылда үҫтек, уҡыныҡ, бөгөн вазифаһы урын биләгән ҙур чиновниктарыбыҙ ҙа - сығыштары менән ауылдан. Бәләкәй ауыл мәктәптәрендә уҡыу уларға кеше булып сығырға ҡамасауламаған да баһа, - ти ул.

Быйыл Ишкен ауылынан 4 бала 1-се класҡа бара. Уларҙы ололар ҙа йәлләй, ауылдарҙа уҡыу йорттарының ябылыуына ризаһыҙлыҡ белдерәләр.

- Әҙме-күпме бала мәктәпкә йөрөгәндә ауылда ла йәмле ине. Балаларҙың урам буйлап атлауҙары, тыпырлап йүгереүҙәре, күңелле тауыштары тирә-яҡҡа ҡот килтереп тора бит ул. Ә хәҙер ауыл йәмһеҙләнеп, бушап ҡалғандай тойола. Ишкендә электән башланғыс мәктәп булды. Беҙ ҙә шунда уҡыныҡ. Аҙаҡтан ғына күрше ауыл мәктәбенә күстек, - ти 73 йәшлек Мәрйәм апай Хилажева.

Ҡарт Муйнаҡ ауылында йәшәүсе Зәлфирә Рәхмәтуллина өс бала әсәһе. Кесеһе башланғыс класта. "Баланы сиккә ебәреүе ҡыйын. Юлда төрлө хәл булыуы ихтимал, балаҡайым иҫән-ҡау ҡайтып етһен инде, тип һәр көндө борсолоп үткәрәбеҙ", - ти ул да. Ябылған Ҡарт Муйнаҡ мәктәбе бинаһында бер шәхси эшҡыуар тегеү цехы асырға ниәтләй. Бинаны ҡуртымға алыр өсөн район хакимиәтенән ризалыҡ һораған. Бер нисә йыл элек шул уҡ эшҡыуар тегеү цехын Кәрим ауылы мәктәбе бинаһында асҡан булған. Ундағы 9 йыллыҡ уҡыу йорто ла башта башланғыс мәктәпкә әйләндерелеп, аҙаҡтан бөтөнләй ябылды. Ләкин тегеү цехы оҙаҡ эшләмәне. Мәктәп бинаһын янғын юҡ итте. Хәҙер Кәримдә эш урындары ла, уҡыу йорто ла юҡ. Ҡарт Муйнаҡ ауылы ла шундайыраҡ яҙмыш кисермәһә ярай ҙа. Эш урындары булдырылған хәлдә лә, мәктәп эшләмәһә, ауылда йәштәр күпләп нигеҙ ҡорормо икән?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беренсе сентябрҙән яңы дәүләт федераль белем биреү стандарттары индерелә. Был яңылыҡ - ауыл мәктәптәрен артабан ябыуға тағы бер һылтау ғына булмағайы. Әле үк Учалы районында тиҫтәләгән мәктәп ябыҡ тора. Закондар федераль кимәлдә ҡабул ителһә лә, барыһы ла урында хәл ителеүе билдәле бит. Ниңә урындағы етәкселәр ауылдар киләсәге тураһында артыҡ борсолоп бармай икән? Мәктәбе ябылған икән, ауыл юҡҡа сыға икәнен улар бит Мәскәүҙә ултырып закон сығарыусыларға ҡарағанда яҡшыраҡ беләләр...**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**
**Учалы районы.**

ЗАМАН ШАУҠЫМЫ



# ЗИМАГОРҘАР ҠАЛАЛА...

## аҡсаны "көрәп" аламы?

**Ауыл егеттәренең ҡалаға килеп, "шабашка" тип аталған эштәрҙә йөрөүе йышайған ваҡыт бөгөн. Заман ысынбарлығы тип әйтәйекме быны, афәт тип атайыҡмы - ауылдарҙа эш таба алмай йонсоған йәштәр бөгөн ҡалаға эркелеп килеүен дауам итә. Әммә баш ҡалала, мәҫәлән, берәүҙе лә бер кем дә "калас менән" көтөп тормай: йәшәр өсөн торлаҡ та, теләгән ерендә эшкә урынлашыу мөмкинлеге лә юҡ. Шуға күрә ҡалаға килгән һәр кем был мәсьәләне хәл итеү юлын үҙе эҙләй, үҙе таба. Кемдер туғандарын, таныштарын йәлләп итһә, кемдер ҡара тырышлығы арҡамында үҙе ҡайҙалыр барып урынлаша. Ҡайһы берәүҙәр төшөнкөлөккә бирелеп, юғалып ҡала һәм ауылына кире ҡайтып китә. Ҡалаға килгән ауыл егеттәре араһында тағы бер категория бар - билдәле бер эш урыны булмаһа ла, көн һайын "шабашка"ларҙа йөрөүселәр. "Шабашник"тар кемдәр һуң? Был төшөнсә менән таныш булмағандар өсөн аңлатып үтәйек: ниндәй ҙә булһа бер эште күпмелер ваҡыт эсендә башҡарып, хеҙмәте өсөн килешелгән суммала эш хаҡы түләнә, әммә был хеҙмәт юридик документтар менән бер ҡайҙа ла теркәлмәй - был эшлекле мөнәсәбәт, халыҡсан тел менән әйткәндә, "шабашка" тип, ә эш биреүсене хеҙмәтләндереүсе кеше "шабашник" тип атап йөрөтөлә.**

Бер мәл үҙемдә "шабашник" сүрәтендә һынап ҡарарға булдым. Ял көнөмдә файҙаланып, таң менән улар йыйыла торған урынға килеп баҫтым. Егеттәр араһына барып индем дә, ҡыҙыҡһынып, барыһын да күҙәтә башланым. Икеүһе менән юҡ-бар тураһында һөйләшеп киттек. Йәйләп, үҙемде ҡыҙыҡһындырған йүнәлешкә борҙом "тәртә"не. Эш эҙләүсе егеттәрҙең күпселеге беҙҙең Урал аръяғы төбәгенән булыуы асыҡланды. Барыһы ла тиерлек төнгө күңел асыуҙарҙан айыҡып етмәгән килеш килгән. Бер яҡташ "баш төҙәтергә" тип йүгерә-атлай аҡса теләнселәргә керешә. Һоранып йөрөй торғас, тейешле сумманы йыйҙы, ахыры, үҙе менән ике иптәшен эйәртеп, ҡайҙалыр китеп юғалды. Ҡайҙалыр, тигәнем, билдәле инде...

Иғтибар үҙегендә тағы берәү пәйҙә булды: был да беҙҙең яҡ кешеһе икән. Хәл-әхүәл һорашып, бер талай ваҡыт үткәс, эшселәрҙән тәмәке эҙләргә тотондо был. Тәмәке табып, тоҡандырғас, беҙҙең янға килеп, кисә кис урамда үҙе менән булған бер ваҡиғаны һөйләне. Уны кемдер һыра менән "һыйлап" киткән. Һыйланыу өсөн үҙенең йоҙроҡтарын эшкә ҡушҡан. Көсө бар, күренеп тора. Тик ҡасанға тиклем файҙалана алыр икән уны? Бына был һыраны кеше иҫәбенә эсергә яратыусы егетте берәү ситкәрәк алып китте лә, уға дөғүәһен белдерә башланы: "Кисә төн уртаһында ниңә шылтыраттың?" Яуап булмағас, артабан дауам итте: "Иҫләйһеңме һуң үҙеңдең нимәләр һөйләгәнеңде? Һин дөрөҫ эшләмәнең, егет..." Бөрөп алып бара был беҙҙең әле генә ҡуҡырайып торған егетте. Ҡуҡырыҡ егетебеҙ үҙенән ике башҡа тәпәшерәк бәйләнеүсеһенә бер ни әйтә алмай тик тора. Егеттәр әйтеүенсә, элекке спецназсы икән үҙе: буй бар, тик холҡо ғына юҡ. Холҡо булһа, ошо "кәтүк" алдында бәлйерәп төшмәҫ ине...

Хәҙер инде беҙ ике яҡташ менән бергәләп эш көтәбеҙ. Килеүемә ярты сәғәт самаһы булғандыр. "Шабашник"тарҙы ойоштороп, эш биреүселәрҙе йәләп итеүсе "шеф" егеттең үҙе менән һөйләшергә булдым. Ул - иномаркаһы эсендә ултырып, тәҙрәһен асҡан килеш, мин - ямғыр һибәләгәс, капюшонды кейгән килеш тышта тороп, бер аҙ хәбәрләшеп алдыҡ. "Был егеттәр "шабашка"ға әллә ваҡыт үткәреп, кәйеф-сафа ҡорор өсөн генә киләме?" - тип һораным унан. "Шеф" егеттәр араһында эскелектең киң тамыр йәйеүе тураһында әсенеп һөйләне. Уның фекеренсә, күпселек әҙәм эсергә аҡса табыр өсөн генә йөрөй "шабашка"ға. Араларында эсмәгәндәр ҙә бар барлыҡҡа, әммә бик һирәк. Иң тырыштар көнөнә 1000-2000 һум аҡса эшләй ала. Егет бер ваҡиға тураһында һөйләне: "Бер эшҡыуар килеп, бер кешегә айына 50 мең һумлыҡ эш тәҡдим итте. Төҙөлөш барған ерҙә цемент менән эшләргә кәрәк ине. Ләкин был эшкә берәүҙең дә барғыһы килмәне: "Мин көнөнә 300-500 һум аҡса эшләп торорға ла риза, егеттәр менән бергә булһам, шул еткән", - тинеләр". Һөйләшеп бөткәс, "шеф" мине, минең ике таныштыһәм тағы бер егетте 2-3 сәғәтлек эшкә оҙатты. Дүртебеҙ эшкә яллаусының машинаһына тейәлеп, уның Өфө ситендәге бер ауылда яңы төҙөлөп ятҡан өйөнә килеп төшөп, ике сәғәт ярым эсендә бер "Камаз" таҡтаһын өйөп бирҙек, ошо эшебеҙ өсөн һәр беребеҙ өс йөҙәр һум аҡса эшләнек. Дүртенсе егеттең һүҙҙәренә ҡарағанда, был эштә оҙаҡ ваҡыт йөрөй икән: күп кенә аҡса ла туплаған, тиҙҙән өйләнергә лә иҫәп тота. Үҙенән араҡы еҫе килмәһә, һүҙҙәренә ышанырға ла булыр ине, валлаһи... Хужа кеше беҙҙе кире "шабашниктар" көтөүенә алып килде лә, үҙе ары елдерҙе. Егеттәр артабан эш көтөргә булды: "Бәлки, тағы берәй эшкә ебәрерҙәр", - тип ҡалдылар. Ә мин, тәьҫораттар сағыу сағында "шабашка" мажараларын ҡағыҙға тиҙерәк төшөрәйем, тип, ҡайтып, ҡағыҙ менән ҡәләмгә үрелдем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XX быуат башында йәй айҙарында ғаиләһенә бесән әҙерләп биргәндән һуң, ҡыш башланыу менән ауылдан ҡалаға килеп, заводтарҙа, алтын, мәғдән приискыларында эшләүсе кешеләрҙе "зимагорҙар" тип атағандар. Халыҡ араһында абруйҙары булғандырмы, юҡмы, уныһын әйтеүе ҡыйын. Шулай ҙа, аҡса эшләүгә ҡарағанда, уларҙы ла бөгөнгө "шабашниктар" кеүек үк күңелле йәшәү рәүеше ныҡыраҡ ылыҡтырғанлығы билдәле. Улар тураһында сығарылған таҡмаҡтарҙа был ысынбарлыҡ асыҡ сағыла:**

*Зимагорҙар толчокта -*
*Ҡайғырмайҙар эш юҡҡа.*
*Ҡайғырһалар, ҡайғыралар*
*Тәмәкеләре юҡҡа.*
*Зимагорға хат яҙалар:*
*"Утын бөттө, ҡайт!" - тиеп.*
*Хатҡа ҡаршы хат яҙалар:*
*"Өй мөйөшөн яҡ", - тиеп...*

**Бараҡтарҙа йәшәп, урындағы эшселәрҙән тәмәке тартырға, араҡы эсергә, кәрт һуғырға өйрәнеп ҡайтҡан "зимагор"ҙар заманы тағы киләме түгелме?**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

**✓ *Беләләрме икән хәҙер украиндар беҙҙә ҡырҡылған ҡарағай өйҙәрҙә йәшәүҙәрен? Уға тиклем дә беҙҙә ҡарағай урмандарын ҡырҡып, һал менән Еҙем йылғаһы аша Ағиҙелгә төшөрөп, Өфө тарафтарына ҡыуалар ине.***

# УРМАН МӘҢГЕЛЕК

## урмандарыбыҙ урынында

**Хат ташыусының өйөбөҙгә "Ағиҙел" журналын килтереүе бала сағымдың матур бер хәтирәһе булып күңелемә уйылып ҡалған. Беҙ кемуҙарҙан йүгерешеп, журналды ҡулға эләктерә һалып, башҡаларҙан йәшереп ҡуябыҙ. Шулай булмай һуң: яратҡан яҙыусыбыҙНоғман Мусиндың "Һайлап алған яҙмыш", "Мәңгелек урман" романдары һандан-һанға баҫыла бит унда. Романдағы ваҡиғалар артабан нисек булғанын иң тәүҙә мотлаҡ мин белергә, шул ваҡиғалар шауҡымына бирелеп, геройҙарҙың тойғоларын иң тәүҙә мин кисерергә тейешмен бит. Шуның өсөн журналды ла иң тәүҙә мотлаҡ мин уҡырға тейешмен. Шуға күрә уны йәшереп кенә уҡыйым да, аҙаҡ ҡына өйөбөҙҙөң түрендә торған өҫтәл өҫтөнә һалып ҡуям. Күп тә үтмәҫтән, журнал тағы юҡҡа сыға ла, тағы ла өс-дүрт көндән һуң өҫтәлгә килеп ята. Ул ваҡытта телевизор булманы, күңел зауығыбыҙҙы әҙәби әҫәрҙәр уҡып, радио тыңлап ҡандыра инек. Ошоларға өҫтәп, минең тағы ла бер шөғөлөм артты. Ул да булһа, Ноғман Мусиндың романындағы Төлкөсура батырға оҡшарға тырышып, киске эңерҙә тирләп-бешеп ауыр атлетика менән шөғөлләнә, гер, штанга күтәрә башланым. Үҙемсә уңышҡа ла өлгәштем: унынсы класҡа еткәндә ауырлыҡ күтәреү буйынса урам-ихата ярышында миңә етеүсе булманы... Бына шулай, ҡасан да булһа баш ҡалаға килеп, бала сағымдан алып күңелемде сихри донъяға сорнаған мәшһүр әҙип менән бер үк һуҡмаҡтарға баҫып, бер үк әҙәбиәткә хеҙмәт итеп йөрөрмөн тип кем уйлаған инде. Бында мине лә, ауылдашым, күршем Рәйес Түләкте лә Ноғман ағайҙың сихри донъяһы ла саҡырып торғандыр, күрәһең... Күренекле прозаик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ноғман МУСИНға ошо көндәрҙә 80 йәш тула. Уның менән осрашып, данлыҡлы юбилей көндәрен үткәргәндә әҙиптең ниндәй уйҙар менән йәшәүе хаҡында белешеп, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәне. Уның әңгәмәһен һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ.**

### Беҙҙең быуын

XX быуатта йәшәгән кешеләрҙең тормошо хәҙергеләргә һөйләп аңлатҡыһыҙ ҡатмарлы булды. 80 йыллыҡ ғүмеремдең 70 йылы хәтергә алырлыҡ булып, күңелдән кисереп йәшәлгән. Кеше бик сыҙам, сабыр йән эйәһе, ул барыһын да кисерә, бик күп ауырлыҡтарҙы үткәрә белә. Шул яҡтан ҡарағанда, үткән быуаттың 30-сы йылдар башында тыуған беҙҙең быуын вәкилдәренең тормошо, бер яҡтан ҡарағанда, ғәжәп итеп һөйләрлек, икенсе яҡтан ҡарағанда, үкенесле яҡтары ла булды. Уйлап ҡараһаң, совет дәүеренең барлыҡ күренештәре тиерлек беҙҙең баштан үтте. Беҙ ул дәүерҙең Сталинын да, Хрущевын да, Брежневын да, Горбачевын да, Ельцинын да күрҙек. Һәр бер етәксе тормошто үҙенсә ҡорорға тырышты һәм һәр береһенең уңыштары менән бергә хаталары ла булды. Әммә XX быуатты тотошлайы менән күрмәгән, кисермәгән 60-70-се йылдарҙа тыуған ғалимдар, академиктар беҙ йәшәгән дәүерҙең тик кире яғын ғына күрергә тырыша. Рәсәй ниндәй генә осор кисермәһен: батшалыҡ дәүере булһынмы, совет осоромо, Ельцин үҙгәрткән, нисек тип атарға ла белмәгән хәҙерге заманмы - барыһы ла кеше күңеленә онотолмаҫ эҙҙәр ҡалдыра торған осорҙар булды.

Минең хәтерҙә, һуғыш алдынан тормош шул хәтлем матурланғайны. Бөтөн әйбер бар ине, хаҡтары осһоҙ ине. Илебеҙ халҡы ҙур дәрт менән матур итеп йәшәй башлағайны. Быға илебеҙ заманына күрә дөрөҫ иҡтисади сәйәсәт алып барыу арҡаһында өлгәште. Әле бына илебеҙҙә үҙгәрештәр башланыуға 20 йыл үтте - һәм нимә күрәбеҙ һуң? Бер ниндәй ҙә алға китеш юҡ. Әгәр ҙә һуғыш булмаһа, рухи яҡтан бай, аҡыллы, зирәк, физик яҡтан ҡеүәтле ираттарыбыҙ ҡырылмаһа, улар 20 йыл эсендәге былдай хәлгә түҙеп тора алыр инеме икән? Илебеҙ халҡының генофонды шул саҡта ныҡ ҡына ҡаҡшаны, беҙ уны әлегә тиклем аяҡҡа баҫтыра алмайбыҙ. Илебеҙҙең аҫҡа табан тәгәрәүенең төп сәбәбе тап ошонда.

Күҙ алдына килтерәм: һуғыштан алда беҙҙең ауылда, эй, ниндәй күркәм, ниндәй матур кешеләр йәшәй ине! Ниндәй бәһлеүән кәүҙәле, яҡты йөҙлө ағайҙар! Хәйретдин атлы ағай, тағы ла ике Сибәғәт ағай, Фазлетдин, Әхмәтгәле ағайҙар, түбәнге яҡтан Ғиззәт ағай, Фәссәх ағай. Фәссәх ағайҙың шул тиклем матур кәләше Әминә еңгәй менән балаларын етәкләп, урам буйлап шат йылмайып килгәндәрен онотоrлоҡмо ни! Бөгөн уларҙың береһе лә юҡ. Ғөмүмән, ул саҡта матур, аҡыллы, булдыҡлы, донъя көтөргә атлығып торған кешеләр күп ине. Өлкән йәштәгеләрҙән Салих ағай, Сәхиулла бабай, Сәйфетдин бабай, Лотфрахман бабай, Сәлимгәрәй бабай, Яхъя бабай һәм башҡалар ауылыбыҙҙы матурлап йөрөрҙәр ине. Улар шул тиклем таҙа кәүҙәлеләр, асыҡ йөрәклеләр, матур күңелллеләр ине. Һәр береһе һиненең менән матур итеп һөйләшеп, иҫәнләшеп китер ине. Хәҙер ауылға ҡайтһам, уларҙың береһе лә юҡ. Хатта инеп һөйләшеп ултырырлыҡ кеше лә юҡ. Тиңдәшем, Абдрахманов Рәшит атлы күршем бар. Ул 4-5 йәшендә әсәйһеҙ, һуғыш ваҡытында атайһыҙ ҡалды. Рәшит өй беренсә кешенән-кешегә йөрөп, тамаҡ байына ваҡ мал көтөп йән аҫыраны. Ауырлыҡты күп күрҙе ул, уның ҡарауы, ауылда иң эшсән, иң аҡыллы, донъя көтөргә иң дәртле кеше булып сыҡты. Кәримә тигән матур ҡыҙға өйләнде, уларҙың ете балаһы тыуҙы. Бына тигән итеп өй һалып ҡуйҙы, умарта тотто. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның ҡатыны үлеп ҡалды, балалары таралышты, хәҙер өйөндә ул бер үҙе генә йәшәп ята.

Минең тиңдәштәр бик шәп, эшсән егеттәр булды. Әлбиттә, уларҙың күбеһе уҡый алманы. Ауылыбыҙҙа урта мәктәптең булмауы сәбәпле 30 саҡрымда ятҡан Маҡар мәктәбен миңә бер үҙемә генә уҡып бөтөрөү бәхете тейҙе. Тиңдәштәрем уҡымаһалар ҙа, матур итеп ғаилә ҡороп, донъя көттөләр. Матур итеп балалар тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Һуғыш һәм унан һуңғы йылдар ауырлығын лайыҡлы күтәрҙе тиңдәштәрем, ләкин күбеһе иллегә лә етмәйенсә, яҡты донъя менән хушлашты. Беҙ, тиңдәштәр, 17 егет инек, шуларҙан өсәү тороп ҡалдыҡ: Рәшит, Шәрифулла һәм мин.



### Урман да бөтә икән...

Хәҙерге тормош, бер яҡтан, элекке менән сағыштырғыһыҙ еңел, шул уҡ ваҡытта ауыл халҡына эш юҡ. Беҙҙең ауылда леспромхоз бар ине, ул бөткәйне, 500-гә яҡын өйҙәге кеше эшһеҙ ҡалды. Беҙ быға тиклем урман бөтмәй, мәңгелек тип уйлай инек. Хәҙер шуға ла шаһитбыҙ: урман бөтә икән. Беҙҙә хәҙер буралыҡ, таҡталыҡ ҡарағайҙы Бөрйән районына барып һорап алалар. Ә үҙебеҙ ниндәй урман эсендә ултыра инек! Һуғыш уты Украинаның бик күп ауылдарының көлөн күккә осорҙо. Шуға күрә һуғыштан һуң беҙҙең промартелгә Украина ауылдарын аяҡҡа баҫтырыу өсөн буралар ебәреү бурысы ҡуйыла. Шул ваҡытта беҙҙең ҡарағай урмандарының ҡырылыуын күрһәгеҙ. Беләләрме икән хәҙер украиндар беҙҙә ҡырҡылған ҡарағай өйҙәрҙә йәшәүҙәрен? Уға тиклем дә беҙҙә ҡарағай урмандарын ҡырҡып, һал менән Еҙем йылғаһы аша Ағиҙелгә төшөрөп, Өфө тарафтарына ҡыуалар ине.

Бына шулай, ваҡытында бөтөн ил өсөн кәрәкле булған ауыл кешеләре, хәҙер килеп, бер кемгә лә кәрәкмәне лә ҡуйҙы. Хатта Екатерина II һалдырған берҙән-бер таш юлыбыҙҙан башҡа юлыбыҙ ҙа юҡ беҙҙең. Элек Әүжәндә, Туҡанда, Үҙәндә, Ҡағыла, Белоретта бер нисә тимер иретеү заводы булған. Ошо заводтарҙы төҙөтөү һәм эшләтеү өсөн Ырымбурҙан Белоретҡа тиклемге был юл таш ҡағып һалынған. Ошо юлдың беҙҙең ауыл янында "Селтәрле күпер" тигән өлөшө лә бар. Унда юл әле лә һалына. Стәрленән Белоретҡа тиклем ул стратегик юл тип бынан бер 30 йыл элек һалына башлағайны. 25 километр самаһы һалғайнылар, 90-сы йылдарҙа эш туҡтап ҡалды. Шунан аҙаҡ урыҡ-һурыҡ ҡына эш алып барылып, йылына 1-2 километр һалына торғас, әле беҙҙең ауылға 13 километр самаһы ара ҡалды. Бик ҡатмарлы проект буйынса, тауҙы тауға тоташтырып, тау араларына таш тултырып һалына был юл. Шулай итеп, Әбей батша башлаған юлдың әле яртыһы ла һалынып бөтмәгән. Әле ул юлдың иң ауыр өлөшө ҡалған. Юл булмаған, ул төбәктәге ауылдар хәйерсе хәленә ҡалып бөткән дә инде. Бынан сығып нимә әйтергә була: заман кешегә үҙенең ауырлыҡтары менән үҙе теләгәнсә йәшәргә мөмкинлек бирмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, яҡташтарым зарланмай, мал көсө менән йәшәйҙәр, хәҙер умарта тота башланылар. Тик эсте бошорғаны ла шул: һәр кем үҙе өсөн генә йәшәй. Ауылдың күршелек тойғоһо юҡҡа сыға бара, хәҙер хатта ауылда өй күтәрергә өмәгә лә йөрөмәйҙәр.

***Беҙҙең милләт кешеһенә дала һәм урман психологияһы хас. Тәү ҡарашҡа дала кешеһенә асыҡлыҡ, урман кешеһенә серлелек хас. Был хәл аңлашыла: көн иткән төбәк, мөхит кешенең холҡон, фиғелен әүәләй, характерын ҡылыҡһырлай. Тағы ла йәшәү рәүеше лә кешенең холҡонда сағыла, әйтәйек, урманда ишек һәм бик булмаған кеүек, урман кешеһенең күңеле лә һәр кемгә асыҡ. Шул уҡ ваҡытта дала стихияһына көтөлмәгәнлек хас булғанға күрә, унда йәшәүселәр ҙә тәү күргән кешеһенә һағайып ҡарай, ҡапылғарай асылып бармай. Урманда үҫкән кешелә ил, ер тойғоһо ла икенсерәк һымаҡ. Урмандың үҙ стихияһы бар. Унда йөрөгәндә далала барғандағы уйҙарҙы уйлап булмай. Мин кешегә ҡараһам, уның урмандамы, далаламы тыуып-үҫкәнлеген шундуҡ билдәләйем. Урман кешеһе айырыуса диҡҡәтле, иғтибарлы, дала кешеһе һаҡ ҡына баҫып йөрөй. Башҡорт кешеһенең башҡаларға һәр ваҡыт ярҙамға әҙер тороуы ла урмандан киләлер тием.***

### Ил менән еңел хушлаштыҡ...

Ельцин 1991 йылда броневик башына менеп телмәр тотҡандан һуң беҙ үҙебеҙҙе кеше иткән социалистик ҡоролош менән тиҙ генә хушлаштыҡ та ҡуйҙыҡ. Ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Был әйтеп аңлатҡыһыҙ бер күренеш. Уйлап ҡараһаң, Октябрь революцияһынан һуң власты бирмәҫ өсөн ниндәй ҡан ҡойоғос алыш булған. Миңеңсә, халыҡтың социалистик ҡоролош менән еңел генә хушлашыуы ундағы ил тойғоһоноң яһалмараҡ булыуындалыр. Пионер ваҡыттан алып "Һәр ваҡыт әҙер!" лозунгыһын механик

***✓ Милли традицияларын һаҡлаған Ҡытай менән Японияны иҫкә алайыҡ. Уларҙа Хоҙай һәм тәбиғәт билдәләгән милли йола-традициялар менән йәшәү принцибы һаҡланыуы һәм үҫтерелеүе был дәүләттәрҙе алдынғы иткән.***

рәүештә ҡабатлап йәшәнек шикелле, Ватаныбыҙҙы ошо һүҙҙәрҙе әйткән кеүек механик рәүештә генә һөйҙөк микән әллә? Ябай халыҡ күндәм, ә ниндәй ҡеүәтле идеологияһы булған коммунистар партияһы етәкселәре ниңә быға юл ҡуйҙы һуң? Коммунистарҙың һәр әйткәнен үтәгән комсомолдар ниңә ил менән хушлашырға риза булды? Улар шулай тиҙ генә илде тарҡатырға ризалашҡас, тимәк, уларҙың инаныуы булмаған, улар пост, дәрәжә, өҫтөнлөктәр өсөн генә йөрөгән булып сыға. Етмәһә, донъя үҙгәргәс, элекке коммунистар тиҙ генә коммерсанттар, банкирҙар булып китте, уларҙың балалары ла ошо уҡ юлды һайланы. Ниңә СССР-ҙың тәүге һәм һуңғы президенты булып һайланған Михаил Горбачев та илде һаҡлап ҡалыр өсөн ҡыл да ҡыбырҙатманы. Йомғаҡлап әйткәндә, ил, ҡоролош менән еңел генә хушлашыуыбыҙ тәрбиәнең, инаныстың яһалма булыуынан килеп сыҡманымы икән?

# ...икән, тиһәк...

## ҡаҡ ер ҡалып бара

### Урманға белгес кәрәк

Урман яҙмышы халҡыбыҙ яҙмышы менән тығыҙ бәйле. Минең роман геройы Төлкөсура йәшәгән заманда халыҡ урманды, ер байлығын үҙенеке итеп күреп ҡәҙерләгән, уны һаҡлау сараларын күргән. Ул ваҡытта "Ҡаҙна урманы" һәм "Мир урманы" булған. Ике төр урманды ла халыҡ күҙ ҡараһылай һаҡларға тырышҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Роман Лапшин һымаҡ төрлө юлдар менән урманды осһоҙ хаҡҡа һатып алыусылар ҙа булған. Һатылған урмандар ерҙәрендә йәйләүҙәре урынлашҡан башҡорттар юғалтҡан ерҙәрен кире ҡайтарыр өсөн көрәшкән, үҙҙәренең хоҡуҡтарын даулап хатта Петербургҡа тиклем барып еткән. Улар үҙ маҡсатына ирешкән, сөнки халыҡ берҙәм булған. Совет власы ваҡытында ла әле ул халыҡтың урманға ҡарашы яҡшы булған, һәр хәлдә, ул урманға ирекле рәүештә инеп-сығып йөрөй ала, урманын һаҡлау сараһын күрә ине. Мәҫәлән, совет осоронда файҙаланылған урман диләнкәләрен тап-таҙа итеп таҙартмаһалар, икенсе диләнкәләр бүленмәй ине. Дегет ҡайнатыр өсөн дә ҡайындарҙы йыҡтырманылар, махсус һөңгөләр ярҙамында ҡайындарҙың ҡайырына теймәйенсә генә туҙын һыҙыралар ине. Ул ҡайындарҙың береһе лә ҡороманы. Ғөмүмән, урманды йәне кеүек күргән кешеләр бик күп булды ул саҡта. Абдулов Марсель Хәбиб улы беренсе урман хужалығы министры булып эшләне. Уға тиклем ауыл хужалығы министрлығының бер бүлеге генә урман эше менән шөғөлләнә ине. Ул 25 йыл министр булып эшләү осоронда урманды һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ҙур эш башҡарҙы. Әлеге Урман хужалығы министрлығы урынлашҡан ерҙең тирә-яғына ул донъяла булған барлыҡ ағастарҙы үҫтереп, дендропарк төҙөргә хыялланды. Хәҙер ундағы ағастарҙы ҡырҡып, күп ҡатлы йорттар һалалар. Унның ултыртҡан ағастары хәҙер бер кемгә лә кәрәк түгел. Ошо бәләкәй генә миҫал кемдең урманға ниндәй ҡараштa булыуын күрһәтә. Абдулов урман хужалығында эшләүсе кадрҙарҙы әҙерләүгә ҙур иғтибар бүлде. Ул урманды экономиялыраҡ файҙаланыр өсөн финдарға оҡшатып холдинг асырға иткәйне. Кемдер: "Абдулов Финляндиянан белгестәр килтертеп, холдинг төҙҙөрөп, беҙҙең урмандарҙы ситкә сығарыуҙы яйға һалырға йөрөй", - тип Өлкә Комитетының 1-се секретары Шакировҡа ялыу яҙып бирҙе. Бер аҙнанан Абдуловты эшенән бушатып, Марат Ғәбитовты министр итеп ҡуйҙылар. Уны ла нахаҡҡа ғәйепләп, эшенән сығарҙылар. Артабан Учалынан Риф Ҡаҙаҡҡолов министр булды. Ниндәй генә министр ҡуйылмаһын, береһе лә Абдулов һымаҡ була алманы. Шулай итеп, 2000 йылдың башында Урман хужалығы министрлығын бөтөрөп үк ҡуйҙылар. Оҙаҡ ҡына ваҡыт урман хужалығы Тәбиғәтте һаҡлау һәм экология министрлығына ҡараны. Унда урманды бөтөнләй белмәгән Фәхретдинов тигән кеше эшләне. Әле килеп, Урман хужалығы министрлығын яңынан тергеҙҙеләр. Унда министр итеп беҙҙең ауылда тракторсы, урман ҡырҡыусы булып эшләп күтәрелгән Рәжәп Нәбиуллинды ҡуйҙылар. Ул ситтән тороп урман хужалығы техникумын тамамланы, аҙаҡ институтта уҡыны. Унан һуң тағы ла ике институт бөтөрҙө. Урмандың үҙенән сыҡҡан кеше хәҙер урман хужалығын яңынан юлға һалыу өҫтөндә эшләй. Уға өйрәтеүсе кәрәкмәй, эшенә ҡарап һөйөнөп торам. Кадрҙар бөткәйне, лесхоздарҙы, лесничестволарҙы тарҡатҡайнылар, ҙур ауырлыҡ менән булһа ла ул емерелгән урман эшен юлға һала башланы. Урманды күҙәтеү өсөн һәр 30 саҡрым һайын видеоҡарау ҡоролмалары ҡуйҙыртты. Шул арҡала теге йәки был урында янғын сыға ҡалһа, тиҙ арала унда һауа транспорты барып етә һала һәм янғындарға таралмаҫ элек "ауыҙлыҡ кейҙерә".

### Урман хозурлығы

Беҙҙең милләт кешеһенә дала һәм урман психологияһы хас. Тәү ҡарашҡа дала кешеһенә асыҡлыҡ, урман кешеһенә серлелек хас. Был хәл аңлашыла: көн иткән төбәк, мөхит кешенең холҡон, фиғелен әүәләй, характерын ҡылыҡһырлай. Тағы ла йәшәү рәүеше лә кешенең холҡонда сағыла, әйтәйек, урманда ишек һәм бик булмаған кеүек, урман кешеһенең күңеле лә һәр кемгә асыҡ. Шул уҡ ваҡытта дала стихияһына көтөлмәгәнлек хас булғанға күрә, унда йәшәүселәр ҙә тәү күргән кешеһенә һағайып ҡарай, ҡапылғарай асылып бармай. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләгәндә баҫманың рәссам-биҙәүсеһе Ғүмәр Мөхәмәтшин менән Хәйбулла районына сиҙәмселәр тураһында яҙырға барғанда мин дала кешеһе менән урман кешеһенең ныҡ ҡына айырылғанын аңланым. Беҙ унда ҡуныр урын, ашарлыҡ аҙыҡ тапмай йөрөгәйнек. Урманда үҫкән кешелә ил, ер тойғоһо ла икенсерәк һымаҡ.

Урмандың үҙ стихияһы бар. Унда йөрөгәндә далала барғандағы уйҙарҙы уйлап булмай. Урманда күп йөрөнөм һәм йөрөйөм. Ҡалаға килгәс тә һунарға урманға сығып китә инем. Һунар тигәнем дә урман уйҙарына бирелер өсөн һылтау ғына инде ул. Урмандың кеше аңлатып бөтмәҫлек сихри көсө бар. Башҡа бер ваҡытта ла уйлап та ҡарамаған уй-фекерҙәр килә урманда. Бер ағасҡа ҡарап тороу ҙа мейелә әллә күпме уйҙар тыуҙыра. Был үҙенә күрә урман фәлсәфәһе күренеше. Мин кешегә ҡараһам, уның урмандамы, далаламы тыуып-үҫкәнлеген шундуҡ билдәләйем. Урман кешеһе айырыуса диҡҡәтле, иғтибарлы, дала кешеһе һаҡ ҡына баҫып йөрөй. Башҡорт кешеһенең башҡаларға һәр ваҡыт ярҙамға әҙер тороуы ла урмандан киләлер тием. "Мәңгелек урман" романында ла Төлкөсура киләсәктә ҡан дошманы буласаҡ Романды өҫтөнә ташланған һеләүһендән ҡотҡара.

Һуңғы ваҡытта үҙебеҙҙең арала ла ике йөҙлөлөк күренеше барлыҡҡа килде. Кемгәләр ярамһаҡланып, нәмәгәләр өлгәшергә тырышыусылар ҙа бар беҙҙең арала. Хатта яҙыусылар араһында ла бар ундайҙар, шулай булғас, башҡаларға нимә ҡала инде? Юғары власть кешеләре араһында ла бар ундай мөнәсәбәт. Мәскәү яҡтарында улар хатта киллер яллап, бер-береһен үлтереүгә тиклем барып етә. Ниндәй йыртҡыслыҡ был, уның тамырҙары ҡайҙан килә? Сөнки кеше үҙ тәбиғәтенән айырыла, уның күңелендә урман хозурлығы кәмей. Уларҙың күңелендә ҡоштар һайрап торған йәнле сихри урман юҡ. Күңелендә урман хозурлығы булған кеше былдай аҙымға бара алмаҫ ине. Донъяла тәбиғәттән дә сафыраҡ урын юҡ һәм унда былдай күренештәргә урын бөтөнләй юҡ. Мин кешелектә күҙәтелгән ошондай кире күренештәр хаҡында уйлап, уйҙарымдың осона сыға алғаным юҡ әле.

### Кәнфит биреп алдатып...

Хәҙерге заман тураһында уйлана башлаһаң, ҡарурманға барып ингән кеүекһең, әллә нәмәләр хаҡында, әллә ниндәй уйҙар башҡа килә. Тормошобоҙҙа күҙәтелгән кире күренештәр хаҡында етәкселәр тарафынан дөрөҫ баһа бирелеп, тейешле саралар күрелһен ине, тием. Хәҙерге ваҡытта тикшереүсе әллә ниндәй социологик-аналитик үҙәктәр бик күп. Уларҙың береһе бер гәзиттә шундай һығымта яҙған: "Бөгөн Рәсәйҙә енәйәтселектең сәскә атҡан урындары Байкал регионында, Алтай крайында, енәйәттең иң аҙ яһалған урыны Чечняла, Ингушетияла һәм Дағстанда..." Байкалда һәм Алтайҙа енәйәттәрҙең күп булыуы уларҙағы йәшәү кимәленең түбән булыуы менән аңлатыла икән. Күп кенә енәйәттәр унда көнкүреш кимәлендә, ғаиләләрҙәге төрлө ыҙғыштарға, ваҡ-төйәк әйбер урлашыуға бәйле. Ә Төньяҡ Кавказ республикаларында иһә, ғаиләләр ныҡлы, дини һәм милли йолалар һаҡлана, тормош ауыр булһа ла, ыҙғыштар тышҡа сығарылмай. Бик парадоксаль күренеш: телевидение-радио һуғыш бара тип күрһәтеп-һөйләп торған төбәк тәртип йәһәтенән иң алдынғыһы һанала.

Бөгөн Чечняла Америкалағы кеүек күккә ашҡан бейек йорттар төҙөйҙәр. Унда тағы ла Европа стандарттарына тап килтереп стадион төҙөп ҡуйғандар. Уларға дәүләт, кеше башынан сығып иҫәпләгәндә, беҙҙең республикаға ҡарағанда 2,5 тапҡырға күберәк аҡса бүлә. Чечня дотациялағы республика, ә беҙ донор республика. Беҙ бай республика булып иҫәпләнһәк тә, йүнле стадионыбыҙ, әҙәм рәтле юлдарыбыҙ юҡ. Әле беҙҙә нисәмә йыл тырышып "Динамо" стадионын төҙөп ҡуйҙылар, әммә ул футбол уйнарға яраҡһыҙ. Беҙҙә футбол спортын юғары лигаға күтәреү бурысы ҡуйылды ҡуйылыуға, әммә яһалма үлән түшәлгән стадионда футбол уйнап булмай. Был хәл йәш сағымдағы бер хәлде иҫкә төшөрҙө. Беҙ элек Фрунзе урамында ағас йортта торғанда бәләкәй ҡыҙыбыҙ урамға уйнарға сыҡһа, ҙур ҡыҙҙар уны бергә уйнатмайынса, илатып ҡайтаралар ине. "Өйөгөҙҙән печенье-кәнфит сығарһаң ғына үҙебеҙ менән бергә уйнатабыҙ", тигән шарт ҡуйғандар икән үҙенә. Чечняны ла шулай уҡ кәнфит биреп, үҙебеҙгә ҡаратырға тырышабыҙ түгелме икән? Был дөрөҫ сәйәсәт түгел, минеңсә. Ә бит кешене бала сағында ғына кәнфит биреп алдатып тотоп була. Чечня етәксеһе үҙ инициативаһы менән республика башлығының "президент" тигән атамаһынан баш тартты. Белергә ине, бының өсөн ул күпме "дивидент" алды икән? Был дөрөҫ булмаған осһоҙ сәйәсәт.

### Көлкөбөҙ яңырҙы...

Илебеҙ етәкселеге үҙ алдына бик яҡшы маҡсаттар ҡуя, әллә күпме төрлө проекттар эшләнә, әммә уларҙың күбеһе тормошҡа ашырылмай ҡала. Ресурс, сеймал етерлек, халҡыбыҙ тырыш, эшсән, әммә беҙ иң бай илдә йәшәп тә хәйерсе хәлендәбеҙ. Ни өсөн? Был хаҡта уйлана башлаһаң, ептең осона сыға алмай бер булаһың. Минеңсә, был күренештәрҙең төп бер сәбәбе кадрҙар мәсьәләһендәлер тип уйлайым. Сталин һәр дәүләт, һәр заман өсөн ярарлыҡ "Кадрҙар барыһын да хәл итә" тигән бөйөк һүҙҙәр әйтеп ҡалдырған. Хәҙер беҙҙә етәксе кешене эшсәнлеге, шәхси сифаттары буйынса түгел, ниндәй фирҡәлә тороуына ҡарап тәғәйенләйҙәр. Хатта совет осоронда коммунистар етәксе кадрҙарҙы билдәләгән саҡта теге йәки был кешенең эшсәнлек сифатына иғтибар булды. Хәҙер иһә халыҡтың яҙмышы, илдең киләсәге тураһындағы хәстәрлек икенсе планда тора, йәғни власть хәҙер халыҡтан бөтөнләй айырылды. Был хәлде аңлап өлгөргән ил етәкселәре үҙҙәрен власта һаҡлап ҡалыр өсөн "Халыҡ фронты"н барлыҡҡа килтереп, ошондай яһалма ойошторолған хәрәкәткә таянырға итәләр.

***"Беҙ - совет халҡы, совет милләте" тип йәшәгән замандар булды бит инде. Юғары пост биләгән юғары белемле кешеләрҙең милли тойғоно аңлай алмауҙарына иҫем-аҡылым ҡорой һаман да. Кешенең үҙ милләтен яратыуы, үҙ тарихын, үҙ телен белеүе шул уҡ үҙ илен, үҙ республикаһын, Рәсәйҙе яҡлауы, һаҡлауы бит инде ул. Ниңә беҙҙең ил етәкселәренә милли тойғоға ҡаршы көрәшергә һуң? Шуны аңлай алмайым. Һуңғы ваҡытта был көрәш тағы ла көсәйеп бара. Бигерәк тә Францияла, Англияла, Италияла африкандарға ҡаршы нәфрәт тойғоһо арта бара. Кешеләр ниндәй генә диндә булмаһын, ниндәй генә телдә һөйләшмәһен, ниндәй генә тарихи шарттарҙа тәрбиәләнмәһен, барыбер шул кешеләр булып ҡалалар бит. Кешене донъяға башҡа төрлө ҡарашы, башҡа төрлө йолаһы, йәшәү рәүеше булғаны өсөн генә күрә алмаҫҡа буламы икән?***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***✓ Ҡайһы бер яҙыусылар мәктәп уҡыусылары араһында үҙҙәренең исемендәге әҙәби конкурстар үткәрә башланы. Иң яҡшыларына премия бирәләр. Нисек инде ул бала бәләкәйҙән үк әҙәбиәтте аҡса менән баһалай башларға тейеш?***



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Хәҙер үҙәктә сыҡҡан гәзиттәрҙә "Кем Рәсәйҙең президенты була, Медведевмы, Путинмы? Ниңә улар һаман асығын әйтмәйҙәр?" тигән һорауҙарға яуап эҙләйҙәр. Бында, асылда, бары тик ике кеше хаҡында ғына һүҙ бара. Ниңә, Рәсәйҙә башҡа кеше юҡмы ни? Халыҡ бына ошондай әллә ниндәй хәлгә барып еткән, башҡа төрлө уйлай алмай. Минеңсә, уларҙың ҡайһыһы президент булһа ла, әлеге хәл үҙгәрмәйәсәк. Ҡасан бындай түбән хәлдән күтәрелер халыҡ, ҡасан "мин - ил хужаһы" тип әйтер, ундай көндөң ҡасан килерен мин күҙ алдына ла килтерә алмайым.

Бындай күңелһеҙ хәл-күренештәрҙең сәбәбен мин совет осоронда барлыҡ милләттәрҙе бер ҡалыпҡа һалып, совет халҡы, совет милләте яһарға тырышыуҙа ла күрәм. "Беҙ - совет халҡы, совет милләте" тип йәшәгән замандар булды бит инде. Юғары пост биләгән юғары белемле кешеләрҙең милли тойғоно аңлай алмауҙарына иҫем-аҡылым ҡорой һаман да. Кешенең үҙ милләтен яратыуы, үҙ тарихын, үҙ телен белеүе шул уҡ үҙ илен, үҙ республикаһын, Рәсәйҙе яҡлауы, һаҡлауы бит инде ул. Ниңә беҙҙең ил етәкселәренә милли тойғоға ҡаршы көрәшергә һуң? Шуны аңлай алмайым. Һуңғы ваҡытта был көрәш тағы ла көсәйеп бара. Бигерәк тә Францияла, Англияла, Италияла африкандарға ҡаршы нәфрәт тойғоһо арта бара. Кешеләр ниндәй генә диндә булмаһын, ниндәй генә телдә һөйләшмәһен, ниндәй генә тарихи шарттарҙа тәрбиәләнмәһен, барыбер шул кешеләр булып ҡалалар бит. Кешене донъяға башҡа төрлө ҡарашы, башҡа төрлө йолаһы, йәшәү рәүеше булғаны өсөн генә күрә алмаҫҡа буламы икән? Бөгөн ниндәйҙер халыҡты инҡар итергә тырышҡан кеше үҙенә ҡаршылыҡ ҡына тыуҙыра.

Беҙ Ҡытайҙы күпме тәнҡитләнек, уларҙың культура революцияһынан күпме көлдөк. Ана шул ил бөгөн үҙҙәрендә дөрөҫ иҡтисади сәйәсәт алып барылыуы арҡаһында күтәрелде лә китте. Көлкөбөҙ яңырҙы.

## Асылды юғалтыу бәләһе

Хәҙерге ваҡытта, асылда, бер милләтле булған, боронғо йәшәү рәүештәрен, милли йолаларын һаҡлаған милләттәр һәм дәүләттәр үҫеш осоро кисерә. Миҫал өсөн Ҡытай менән Японияны ғына алайыҡ. Бөгөн был дәүләттәр һәр йәһәттән алға сыҡты. Шуға күрә беҙҙең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарыбыҙҙың, бөтә бәләләребеҙҙең сәбәбе милли асылыбыҙҙан айырыла, йола-традицияларыбыҙҙы онота барыуыбыҙҙа. Сөнки һәр милләттең йәшәү рәүеше йола-традициялар рәүешендә уға бит Хоҙай һәм тәбиғәт тарафынан һалынған һәм мәңгелеккә нығытылған. Беҙ меңәр-меңәр йылдар буйынса шул йола-традициялар нигеҙендә йәшәп килеп, XX быуатта уларҙан айырылдыҡ та, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһен, тормошобоҙҙоң ҡотон юғалта башланыҡ. Беҙҙә ниңәлер яңы ижтимағи ҡоролош, яңы власть килде, тип, меңәр йыллыҡ тәжрибәгә таянмайынса, халыҡтың менталитетын үҙгәртергә тырышалар. Был мөмкин булмаған эш, минеңсә. Милләтте теленән, тамырынан, йолаһынан айырырға тырышыу тотош илдең тамырына балта сабыу менән бер. Әгәр ҙә дәүләт күп милләтле икән, ундағы һәр милләттең үҫешен тәьмин итмәйенсә тороп, дәүләттең берлеген тәьмин итеү мөмкин булмаясаҡ. Йәғни кемдеңдер, ниндәйҙер милләттең хоҡуҡтарын инҡар итеүгә, һанға һуҡмауға ҡоролған сәйәсәт һуңғы сиктә ошо уҡ милләтте юҡҡа сығарасаҡ. Нисек инде урыҫтың урыҫса, татарҙың татарса, башҡорттоң башҡортса яҡшы белеүе уларҙың араһында ҡаршылыҡ барлыҡҡа килтерһен? Ә беҙҙә уҡытыу программаһындағы милли компонентты юҡҡа сығарыуға ҡоролған сәйәсәт тап ошо сәбәпте һылтау итеп ҡуя. Ә үҙенең милли тойғоһо ҡыйырһытылған кеше башҡаларға нисек тыныс, уларҙың ихтыяжын аңлап ҡарай алһын инде? Ошоларҙан сығып шундай һығымта яһарға ла була: беҙҙең илдең иң ҙур бәләһе - унда йәшәүсе халыҡтарҙың милли тамырҙарынан айырылыуында, илебеҙҙең һаман да мандып йәшәп китә алмауы ла ошо сәбәпкә бәйле. Был тәңгәлдә бая телгә алған милли йолаларын, традицияларын һаҡлаған һәм үҫтергән Ҡытай менән Японияны тағы ла иҫкә алайыҡ. Уларҙа Хоҙай һәм тәбиғәт билдәләгән милли тормош, милли йола-традициялар менән йәшәү принцибы һаҡланыуы һәм үҫтерелеүе был дәүләттәрҙе алдынғы иткән.

Ҡатнаш никахтарға килгәндә, совет осоронда уҡ бындай никахтарҙан тыуған балалар матур һәм аҡыллы була тигән ҡараш йәшәне. Әммә бында барыбер ҙә кешенең үҙ милли асылынан тайпылыу, ситләшеү моменты ла бар. Кешегә икенсе ҡан килеп инеүе уның милләтенә, ата-бабаларына, йола-традицияларына ҡарашын, тыуған иленә, ватанына мөнәсәбәтен үҙгәртә лә ебәрә. Ҡатнаш никахтарҙың милләткә, илгә, ватанға тоғролоҡ йәһәтенән яҡшы һөҙөмтәләргә килтереренә мин ышанмайым. Ғөмүмән, күп кенә ауырлыҡтарыбыҙ милли тойғоларыбыҙ тоноғайыуы, милли асылыбыҙ юғала башлауҙан килә.

Мин урманда күп йөрөгән кеше булараҡ, шуны беләм: урманда ямғыр ике тапҡыр яуа. Тәүҙә ямғыр яуып үтә, шунан ағас япраҡтарына ҡунған тамсыларҙы ел иҫеп ергә төшөрә... Әйткәнебеҙсә, халыҡтарҙы донъяға Хоҙай үҙе белеп яралтҡан, уларҙы тәбиғәт әүәләгән. Ошо милли асылды юғалтыу, үҙ ата-бабаларыңдың рухи мираҫын онотоу, ҡатнаш никах һымаҡ ошондай күренештәр, әгәр ҙә саралар күрелмәһә, бер нисә йылдан милләттәрҙе, һуңынан тотош кешелекте һәләкәткә алып киләсәк. Ул сағында ел иҫкәндән һуң яуған икенсе ямғыр ябай ямғыр ише генә булмаясаҡ, ул Туфан һыуы ише күтәреләсәк һәм кешелекте һәләк итәсәк. Кешелектең үҙ асылынан ситләшеүе милли асылдан ситләшеүҙән башлана.

## Ниңә үҙебеҙҙән көләбеҙ?

Әҙәбиәттең дә, әҙәби ижадтың да кимәле би-и-ик түбәнгә китеп бара. Сөнки әҙәбиәтте, мәҙәниәтте юғарынан яҡлау би-и-ик самалы. Был өлкәләр дәүләт тарафынан "ҡалдыҡ принцибы" буйынса финанслана. Хәҙер гонорар ҙа совет осоро менән сағыштырғанда тинлек кенә булып ҡалғас, бөтә нәмә аҡсаға ҡоролғас, нимә эшләйһең инде? Был хәл үҙе үк әҙәбиәткә баһа булып та күренә. Икенсе яҡтан, минеңсә, әҙәбиәттең, әҙәби ижадтың баһаһын үҙебеҙ ҙә төшөрәбеҙ кеүек. Хәҙер яҙыусы тигән бөйөк исемде әллә ни күренмәгән, халыҡ күңелен бер ваҡытта ла яулап алмаҫтай кешегә бирәбеҙ, уларҙы 10-лап, 15-ләп профессиональ ижади союзға ҡабул итәбеҙ. Уларҙың яҙған әйберен уҡыусы уҡып ҡарай ҙа, әҙәбиәттең кимәленә баһа ҡуя. Беҙ йәш яҙыусыларҙы ҡолаҡтарынан һөйрәп әҙәбиәткә индерергә тырышабыҙ. Минеңсә, уларҙы ҡолаҡтарынан һөйрәп ижади союзға индереп, премиялар, исемдәр биреү мөмкин булған хәлдә лә, кешене ҡолағынан һөйрәп яҙыусы итеү мөмкин түгел. Беҙ арлы-бирле рифмалай белеүсене Бәләбәйгә алып барып, урынһыҙға күтәрәбеҙ ҙә, бер китабы күренәмеюҡмы, уны Яҙыусылар союзына һөйрәкләй башлайбыҙ. Яҙыусылар Союзы бит инкубатор станцияһы түгел, иптәштәр! Был уҡыусыны әҙәбиәттән ситләштерә, дүндерә торған күренеш.

Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер яҙыусылар үҙҙәренең районларына барып, мәктәп уҡыусылары араһында үҙҙәренең исемендәге әҙәби конкурстар үткәрә башланы. Ул яҙыусылар уҡыусылар араһында үҙ әҫәрҙәрен һөйләтеп, иң яҡшыларына премия бирәләр. Мин быны бөтөнләй аңлай алмайым. Нисек инде ул бала бәләкәйҙән үк әҙәбиәтте аҡса менән баһалай башларға тейеш? Был бит әҙәбиәттән көлөп ҡарау, бала күңелен боҙоу. Был, минеңсә, уҡыусыларҙа әҙәбиәткә һөйөү уятыу түгел, авторҙарҙың булмаған баһаһын күтәреүгә тырышыу. Был һуңғы сиктә халыҡ араһында әҙәбиәттең баһаһын төшөрә. Ысын баһаны аҡсаға һатып алып булмай. Балалар шиғыр уҡыһындар, ятлаһындар, яратһындар, яҙа алалар икән, яҙһындар, әммә аҡса биргәндәре өсөн түгел, ә күңелдәре, йөрәктәре ҡушҡан өсөн.

Ошолар хаҡында әсенеп уйлайым да, "Ниңә үҙебеҙҙән-үҙебеҙ көләбеҙ һуң?" тип ҡуям. Беҙгә хәҙер көтөү-көтөүе менән Яҙыусылар союзына ағзалар ҡабул итеүҙән туҡталырға кәрәк. Иң талантлыларҙы һайлап ала белергә кәрәк. Ошо хаҡта уйланыусы күберәк булһын ине.

Мәшһүр шағир Рәйес Түләк үҙе бигерәк бала күңелле, бер ҡатлы аҫыл зат ине. Ҙур талантлы кешеләр һәр ваҡыт бала күңелле булып ҡалалыр инде. Беҙ уның менән ике тапҡыр беҙҙең баҡсаға барҙыҡ, һуңынан фатирыбыҙға ла килеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул бер нәмәне лә аңламаған сабый һымаҡ күренһә лә, бар нәмәне аңлай ине. Беҙ уны үлгәс кенә "XXI быуат башының иң көслө шағиры" тип атаныҡ, үҙенә арнап шиғырҙар, хәтирәләр яҙабыҙ. Үкенескә ҡаршы. Ә бит шундай шағирҙың баш ҡалала үҙ фатиры ла булманы.

## Эш менән сыныҡтым

Хәҙер 80 йәште тултырғас, "шундай-шундай әҫәр өҫтөндә эшләйем", тип маҡтанып булмай. Минең йәштә ижади уйҙарыңды, пландарыңды тормошҡа ашырыр өсөн физик көс тә кәрәк. Шунһыҙ, еренә еткереп уйлау, еренә еткереп эшләү мөмкин түгел. Әле минең дәртем булһа ла, дарман етеңкерәмәгән кеүек. Хәҙер уйлаған уйҙы ҡағыҙға төшөргән хәлдә лә, элеккеләре кеүек әҫәрҙәр булмаясаҡ. Шуға күрә мин һуңғы йылдарҙа хикәйәләр яҙҙым. Әлбиттә, әҙәби процеста ҡатнашҡы килә, ситтә ҡалғы килмәй, сөнки ҡанға һеңгән. Башҡа уйҙар тығыла. Ҡәләмдәштәремдең әҫәрҙәрен уҡып барам, уларға ҡарата фекерҙәр тыуа. Киләсәктә мәҡәләләр, күҙәтеүҙәр яҙырға пландарым бар. Публицистикаға тотонорға ла ҡыҙышып йөрөйөм, башта тыуған уйҙарҙы тыйырлыҡ түгел. Ғөмүмән, һәр һөнәр кешеһе пенсияға сыҡҡандан һуң да элекке йәшәгән тормошон дауам итә бит инде. Мин хөкүмәт эшенән 55 йәштә туҡтаным, Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә эшләп йөрөй инем. Артабан да был эштә ҡалыу мөмкинлеге булһа ла, ижади пландарымды ғәмәлгә ашырыу маҡсатында эштән киттем. Пенсияға тиклем дә ике айға, яртышар йылға яҙышыр өсөн эшемдән китеп ала инем. Мин хәҙер яҙыусыларҙың 70 йәшкә еткәнсе эшләп йөрөүенә аптырайым. Минеңсә, яҙыусы көсдарманы бар саҡта яҙырға тейеш. Былай ҙа бит гәзит-журнал, редакция эштәре беҙҙе ашап бөтөрҙө. Һис юғы, пенсияға сыҡҡас рәхәтләнеп эшләп ҡалырға кәрәк. Ижади ғүмерҙе башҡа төрлө итеп оҙайтыу мөмкин дә түгелдер.

Минән үҙемде нисек һаҡлай алыуым тураһында һорай уҡыусыларым. Бының сере ябай ғына: мин ғүмер буйына үҙемде йәлләмәй эшләнем. Бәләкәйҙән алып өҙлөкһөҙ рәүештә физик эш башҡарыуым да мине нығытҡандыр. Мин физик күнекмә, гимнастика менән түгел, физик эш менән сыныҡҡанмын. Әле лә мин баҡсаға барһам, иң тәүҙә ҡулыма ҡәләм түгел, балта йә көрәк алам. Баҡсамдағы ике өйөмдө лә үҙ ҡулым менән һалдым, һәр ҡаҙағын үҙем ҡаҡтым.

Кешене үҙ күңелен юғарыраҡ кимәлдә, сафыраҡ тотоу ҙа һаҡлайҙыр. Мин йәш ярымда атайһыҙ ҡалдым, әсәйем Ҡөрьәнде яттан белде, ул миңә һәр ваҡыт: "Улым, тормошоңда төрлө ваҡыттар булыр, төрлө кешеләр менән осрашырһың. Һине рәнйеткән, яманлыҡ ҡылған кешеләр булыр. Нисек кенә булмаһын, һин уларҙы күңелеңдән үткәрә бел. Яманлыҡ күрһәткән кешеләргә ҡарата эсеңдә кер һаҡлама, асыуыңды нәфрәткә әйләндермә. Уның кеүектәрҙе үткәреп ебәрә бел. Эсеңдә үс һаҡлау кешене сирләтә һәм ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Хатта һиңә ҡарата яманлыҡ эшләгән кешегә лә яҡшылыҡ эшләргә тырыш", - тип әйтә килде. Миңә ул был һүҙҙәрҙе бик күп тапҡырҙар ҡабатланы. Кешегә артыҡ күп тә тәрбиә кәрәкмәйҙер тип уйлайым. Кеше үҙенә һалынған таҙа орлоҡтарҙы һаҡлап тотһа, бәлки, шул да етәләр.

***Хәҙерге ваҡытта, асылда, бер милләтле булған, боронғо йәшәү рәүештәрен, милли йолаларын һаҡлаған милләттәр һәм дәүләттәр үҫеш осоро кисерә. Миҫал өсөн Ҡытай менән Японияны ғына алайыҡ. Бөгөн был дәүләттәр һәр йәһәттән алға сыҡты. Шуға күрә беҙҙең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарыбыҙҙың, бөтә бәләләребеҙҙең сәбәбе милли асылыбыҙҙан айырыла, йола-традицияларыбыҙҙы онота барыуыбыҙҙа. Сөнки һәр милләттең йәшәү рәүеше йола-традициялар рәүешендә уға бит Хоҙай һәм тәбиғәт тарафынан һалынған һәм мәңгелеккә нығытылған. Беҙ меңәр-меңәр йылдар буйынса шул йола-традициялар нигеҙендә йәшәп килеп, XX быуатта уларҙан айырылдыҡ та, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһен, тормошобоҙҙоң ҡотон юғалта башланыҡ. Беҙҙә ниңәлер яңы ижтимағи ҡоролош, яңы власть килде, тип, меңәр йыллыҡ тәжрибәгә таянмайынса, халыҡтың менталитетын үҙгәртергә тырышалар.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сәстәр үрә торорлоҡ факттар килтерә, фекерҙәр әйтә халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин. Ысын мәғәнәһендәге халыҡ яҙыусыһы. Ә бит хәҡиҡәт кемдер тарафынан, ҡасан да булһа бер әйтелергә тейеш. "Һикһәнем тулды, етәр, хәҙер инде миңә тынысланырға, һәүетемсә генә көн итергә ваҡыт етте", тип аяҡ бөкләп түрҙә генә ултырырға йыйынмай Ноғман Сөләймән улы. Урмандың мәңгелеген һаҡлар кеше бит ул. Юбилейың мөбәрәк булһын, ил ағаһы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

О, СПОРТ!

**Көрәш түңәрәге ойошторолоуға биш йыл ғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты көрәшселәре һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә тәүге урынды бер кемгә лә биргәне юҡ. Белем кимәле лә, йыр-моңға маһирлығы ла, спорт өлкәһендәге уңыштары ла ғариповсыларҙы әллә ҡайҙан башҡаларҙан айырып тора. Көрәш спортын был тиклем юғарылыҡҡа алып барып еткереүҙең сере ниҙә? Ошо һорауға яуапты баш ҡаланың Ҡашҡаҙан спорт комплексында уҙғарылған милли көрәш беренселегендә таптыҡ. Ярыштың башынан аҙағына тиклем уҡыусылары өсөн янып-көйөп ултырған гимназия директоры Әлфир Сулпан улы Ғайсин менән - "милли кадрҙар тимерлегендәге" уҡытыу-тәрбиә эштәре тураһында, 65 килограмға тиклемгә ауырлыкта көс һынашыусы үҫмерҙәр араһында беренсе урын яулаған йәш батыр Рәфис Шаһиев менән егеттең спортҡа ҡарашы, көрәштә осраған ҡыйынлыҡтар тураһында әңгәмәләштек.**

# БЫЛ ГИМНАЗИЯЛА..

## еңеүселәр тәрбиәләнә



**➔ Әлфир Сулпан улы, бөгөнгө көндә һеҙҙең гимназия көрәш буйынса байтаҡ тәжрибә туплаған. Белеүебеҙсә, һеҙҙең көрәш мәктәбен билдәле тренер Йәлил Йосопов етәкләй. Уның тураһында һөйләгәндә нимәләрҙе айырым билдәләр инегеҙ?**

- Йәлил Динмөхәмәт улын үҙебеҙгә саҡырып, ныҡ уңдыҡ. Уның түңәрәгенә 8-11 синыфтарҙа уҡыусы 50-ләп бала йөрөй. Бөтә республикала ойошторолған бәйгеләрҙә ҡатнашалар. Быйыл республикала ойошторолған бөтә көрәш ярыштарында ла беренсе урын яуланылар. Рәсәй ярыштарында ҡатнашып, билбау көрәше буйынса йыл һайын бер егетебеҙ чемпион титулын яулай. Уның элекке тәрбиәләнеүселәре, беҙҙең кисәге уҡыусыларыбыҙ, бөгөнгө студенттар, ҡайһы юғары уҡыу йортонда, ниндәй генә һөнәргә уҡыһалар ҙа, тренерҙарын онотмайҙар, һәр ваҡыт уға киләләр, шылтыратып, үҙҙәренең уңыштары тураһында һөйөнсөләйҙәр. Ҡайһы бер егеттәр Йәлил Динмөхәмәт улы янында үҙҙәре лә тренерлыҡ менән шөғөлләнә.

**➔ Бер егет: "Йәлил ағай беҙгә атай ҙа, әсәй ҙә. Беҙҙе ҡарап йөрөтә, яҡшылап шөғөлләндерә, күп нәмәгә өйрәтә", - тигәйне. Ысын педагог тап уның кеүек булырға тейештер...**

- Эйе. Командабыҙ ағзаларын көрәшкә генә түгел, бөтә яҡтан тәртипкә лә өйрәтә, башҡорт егете асылда ниндәй булырға тейеш - шундай сифаттар ҙа тәрбиәләй ул. Балалар менән тормош тураһында ентекләп, ваҡытын йәлләмәй һөйләшеп ултыра. Дөрөҫ әйтәләр уның кеүектәр тураһында: икенсе атай ул балаларға. Мин, гимназияның етәксеһе булараҡ, уның эше менән бик ҡәнәғәтмен.

Педагогик йүнәлешебеҙҙең дөрөҫ булыуын дәлилләп, тағы шуны өҫтәргә булыр ине: насар уҡыған балаларҙың, әгәр улар көрәшкә йөрөй башлаһа, уҡыуҙары шунда уҡ яҡшыра ла ҡуя. Сөнки ундай балалар ҡуйған маҡсаттарына бара белә, сөмләнеп, тырышып, үҙ алдына шөғөлләнеү улар өсөн ғәҙәти күренешкә әйләнә.

Йәлил Динмөхәмәт улы һымаҡ бөтә республикала бер бөртөк булған кешеләрҙе - эшкә мөкиббән бирелгән фанаттарҙы табыуы, саҡырып алыуы, әлбиттә, тырышлыҡ та талап итте. Ҡурайсылар коллективын етәкләгән уҡытыусы - Баймырҙин Васил Ришат улы менән бейеү ансамбле ойошторған Шафиҡов Әнүәр Хәким улы тураһында ла оҙаҡ итеп һөйләргә булыр ине. Ундай педагогтар балалар менән бар көсөн, бар һәләтен һалып эшләй. Бала мөмкинлектәренең бөтә нескәлектәрен тотоп ала белә ундайҙар. Көрәш, бейеү һәм ҡурай түңәрәктәрен ойоштороусы ғына түгел, бәлки, милли рух тәрбиәселәре лә беҙҙең педагогтар.

Ғәҙәттә, уҡыуында насар билдәләр күренә башлаған балаларға шундайыраҡ һорау ҡуям: "Көрәштә еңә алғас, нинә уҡыуҙа алдыра алмайһың?" - тим. Әлбиттә, бындай проблема ҡуйылһа, балалар уҡыуҙа ла, көрәштәге кеүек үк, еңергә ынтыла һәм һәр ваҡыт маҡсатына ирешә. Беҙ еңеүселәр тәрбиәләйбеҙ. Әгәр уҡыусы майҙанда дәғүәсеһен еңә алған икән, тимәк, тормошта ла еңеүсе буласаҡ, тигән һүҙ.

**Теманы дауам итеп, 7-се синыфтан көрәш менән шөғөлләнгән, Учалы районы Яңы Байрамғол ауылында тыуып үҫкән, әлеге ваҡытта 10-сы синыфты уңышлы тамамлаған Рәфис Шаһиевҡа һорауҙар юлланыҡ.**

**➔ Спортта һәр ваҡыт еңеүсе генә булып булмай, ҡайһы саҡта еңелергә лә тура киләләр. Шул саҡта үҙең өсөн ниндәй һығымталар яһайһың?**

- Тәүге йылдарҙа еңелеүҙәр ҙә, еңеүҙәр ҙә булды инде. Бөтөнләй урын ала алмаһаң, төшөнкөлөккә ул тиклем бирелмәйһең дә ул, ә бына беренсе, икенсе урындар өсөн көрәшеүҙәрҙән һуң еңелһәң, үкенерә. Тәүге урынға сыға алмаған ярыштарҙан һуң бөтә көстө туплап, күнекмәләрҙә тағы ла нығыраҡ тырышып шөғөлләнәм. Ундай саҡта мин: "Икенсе ярышта мотлаҡ еңәсәкмен", - тип уйлайым. Тренерым Йәлил ағай был йәһәттән бик ярҙам итә.

**➔ Ярышҡа "барып күрҙем дә еңдем" тигән ҡанатлы һүҙ менән килешәһеңме?**

- Ниндәйҙер ярыш яҡынлаша икән, тренерыбыҙ беҙҙе, ғәҙәттә, алдан иҫкәртә. Һәр ярышҡа ентекле әҙерләнәбеҙ. "Барып күрҙем дә еңдем" тип кенә булмай шул көрәштә, сөнки әҙерлеге етерлек кимәлдә булмаған көрәшсе бер нәмәне лә яҡшылап эшләй алмай ул барыбер. Көрәштә бил ныҡлығы кәрәк. Әйтәйек, кеше тәбиғәттән ныҡлы икән, ти, тағы ла билдең һығылмалы ла булыуы шарт еңеү өсөн. Ә һығылмалы тән оҙайлы һәм эҙмә-эҙлекле күнекмәләр талап итә. Суворовтың "Уҡыуҙа ауыр, ә һуғышта - еңел" тигән һүҙҙәре хаҡ әйтелгән. Спортта еңер өсөн мотлаҡ ныҡлап шөғөлләнергә кәрәк. Бар сере уның - шул ғына.

**➔ Башҡа берәй спорт төрөнә лә йөрөп ҡарау теләге барлыҡҡа килгәне юҡмы?**

- Сит халыҡтарҙыҡы булғас, башҡа алыш төрҙәренә ҡарашым да икенсе төрләрәк ул барыбер - күңелгә көрәш нығыраҡ ята. Һәр милләт кешеһенә үҙ халҡының көрәше яҡын да, яҡшыраҡ та. Кемдәрҙер, бәлки, икенсе төрлө уйлайҙыр. Ә минең өсөн көрәш яҡыныраҡ. Сөнки ул халҡыбыҙҙың үткәне менән бәйле, ата-бабалар хәтерен үҙендә һаҡлай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡайһы саҡта тәү ҡарашҡа осраҡлы ғына башланып, ҙур еңеүҙәр менән тамамланған кампаниялар шаһиты булғаныбыҙ бар. Әммә аҙағыраҡ был еңеүҙең бик яҡшы әҙерләнгән операция булғанлығын аңлайбыҙ. Бөгөн мин Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһының уңышлы еңеүҙәренең серенә төшөндөм - барыһы ла "милли кадрҙар тимерлеге"ндәге рухи оркестрҙың эшмәкәрлеген көйләүсе дирижерҙың, йәғни директорҙың оҫталығына, тырышлығына бәйләнгән. Ә был оркестрҙағы һәр виртуоз педагог үҙенә генә хас оҫталыҡҡа эйә.**

*Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.*

ЗАУЫҠ

# АЙ, ҒҮМЕРҘӘР,

## бигерәк ҡыҫҡа шул ул

### Донъя йәме

Сибәр булмаған ҡатын-ҡыҙ
Юҡтыр, юҡтыр донъяла,
Гүзәллеге арта һымаҡ,
Улар ғашиҡ булғанда.

Ҡатын-ҡыҙҙы сибәр итеп
Хоҙай үҙе яратҡан,
Ҡатын-ҡыҙ ул мәңгелек сер,
Бар ир-атты ҡаратҡан!

Ҡатын-ҡыҙ бит сәскә кеүек,
Бик тиҙ шиңә һалҡындан,
Ваҡытында һыу һипмәһәң,
Ҡорой һағыш -ялҡындан!

Тормош матур иштәр менән,
Юлдашың булһа янда,
Серләшеп туймай күңелдәр,
Ай, ҡояш балҡығанда!
Бәхетле итә ир-атты,
Ҡатын-ҡыҙ - тормош йәме,
Ғаиләнең йылы усағы,
Донъяның ҡото, йәме!

### Һуңлап аңланым

Әллә аҡыл һуңлап керә микән,
Күп нәмәне һуңлап аңланым,
Яҡындарҙан, хатта дуҫтарымдан
Йәшәйештә күпме алдандым?

Бәхетемде таптым тигәнендә,
Юғалттым шул, ҡабат алдандым,
Ҡараны гел аҡ тип йәшәгәнмен,
Ваҡыт үткәс кенә аңланым.

...Ғүмер буйы аҡҡош мөхәббәтен,
Изгеләрҙән-изге һананым,
Тик тормошта уны табалманым,
Йылдар уҙғас инде аңланым.

### Ғүмерҙәр бигерәк ҡыҫҡа

Ғүмер буйы юлдар яра кеше,
Килә һәр саҡ йәйҙә ҡалаһы,
Өмөт менән киләсәкте байҡап
Янып йәшәй әҙәм балаһы!

Күпме һынауҙарҙы үтә кеше,
Тормош тиғән ярһыу даръяла,
Тик барыбер туймай йәшәүҙәрҙән
Мөғжизәле серле донъяла!

Ғүмер буйы тауға үрләй кеше,
Килә мәңге-мәңге бараһы,
Ай, ғүмерҙәр, бигерәк ҡыҫҡа шул ул,
Яҙҙар менән көҙҙәр араһы!

### Тайҙар саба

Болондарҙа ярһыу тайҙар саба,
Наҙлап ҡына иҫә таң еле,
Ошо тайҙар дәртле йәшлегемә,
Гүйә, алып ҡайттылар мине.

Болондарҙа ярһыу тайҙар саба,
Ҡыңғырауҙар сыңы ҡолаҡта,
Әйтерһең дә, етеҙ йәш саҡтарым,
Елеп үтеп китте шул саҡта.

Ярһыу тайҙар дауыл-ел уйнатып,
Тояҡтарҙан уттар осорҙо,
Көмөш ялҡайҙарын емелдәтеп,
Ни ҡәҙәре шатлыҡ эсерҙе.

Болондарҙан тайҙар сабып үтте,
Көс-дәрт алдым ярһыу тайҙарҙан,
Бар донъямды онотоп, ҡанатланып,
Ҡарап ҡайттым әллә ҡайҙарҙан!

Ниҙер эҙләп йыраҡ офоҡтарға
Кешнәй-кешнәй сапты тайҙарым.
Минең инде көҙөм етһә лә бит,
Янда атты йәшлек таңдарым!

*Радик ХӘКИМЙӘН.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҠШЫ КӘЙЕФ ӨСӨН...

## музыка һәм иртәнге аш

■ Европала бысраҡ һауа һулап йәшәү һөҙөмтәһендә теркәлгән үлем осраҡтарының һаны 19 мең тирәһенә еткән. Өс йылға һуҙылған ун ике Европа иленең ғалимдары тикшеренеүҙәренә ярашлы, үлем осраҡтарының 15 меңе йөрәк сирҙәре менән ауырыусыларға тура килә. Рәсәйҙә был күрһәткес тағы ла юғарыраҡ. Рәсәй халҡының 55 проценты бысраҡ һауалы ҡалаларҙа көн күрә. Ғалимдар белдереүенсә, насар экологик шарттар балалар араһында ҡурылдай астмаһы сиренең артыуына килтерә. Бынан тыш, тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы һөҙөмтәһендә йөрәк-ҡан тамырҙары, ҡурылдай һәм үпкә ауырыуҙары ла арта бара. Аллергиктарҙың артыуы ла ошо проблема менән бәйле. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бысраҡ һауа иммунитетҡа кире йоғонто яһай, шуға ла бындай кеше инфекцион ауырыуҙарға ла тиҙ бирешеп бара.

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике сыынаҡ йәшел сәй эсеү, бер әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьсиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Баҡтиһәң, һау-сәләмәт булыу өсөн кеше көнөнә 10 мең аҙым яһарға тейеш икән. Әммә бөгөн йышыраҡ ултырып эшләүсе кеше көнөнә уртаса 1000-дән алып 3000-гә тиклем аҙым эшләй, ә билдәләнгән нормаға етеү өсөн йәйәү 7 мең тирәһе аҙым яһарға кәрәк. Шуға ла табиптар өҫтәмә рәүештә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Организм яңы физик әүҙемлеккә яйлап күнекһен өсөн аҙымдар һанын ҡапыл арттырыу кәңәш ителмәй. Тәүҙә көнөнә 500 аҙым үтеүҙе маҡсат итеп ҡуйығыҙ һәм аҙымдарҙы көн һайын 500-гә арттыра барығыҙ. Ике аҙнанан көндәлек нормағыҙ 4 меңгә барып баҫасаҡ, ә 14 аҙнанан 10 мең аҙымды ла еңел генә атлаясаҡһығыҙ.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Көнөгөҙ уңышлы үтһен, тиһәгеҙ, һәр иртәне яҡшы кәйеф менән ҡаршылағыҙ, ти табиптар. Бигерәк тә музыка терапияһының көсөргәнешлелекте бөтөрөүе һәм һаулыҡҡа ыңғай тәьсир итеүе билдәле. Шуға ла эшкә йыйынғанда яраткан көйөгөҙҙө тыңлағыҙ. Шулай уҡ иртәнге аш ашап өйрәнегеҙ, тип кәңәш итә белгестәр. Сөнки көн дауамында ҡабул ителгән аҙыҡтарҙың иң мөһиме - иртәнге аш. Иртән сәләмәт аҙыҡ ашау ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә һәм организмға кәрәкле туҡлыҡлы матдәләр бирә.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Нисәнсе йылдар булғандыр, ләкин ул йылдарҙа үлем осраҡтары ҡырҡа күбәйеп китте. Кемдер эсеп үлә, ҡайһыныһы - һыуға батып, ә ҡайһыныһы үңәсенә элмәк һала. Әйтерһең дә, ниндәйҙер иғлан ителмәгән ярыш бара. Өрләктәй ирҙәр ауа. Әлбиттә, был шомло статистика бер мине генә уйланырға мәжбүр итмәгәндер. Һөҙөмтәлә, ошондайыраҡ мәғәнәләге һорауҙар барлыҡҡа килде. Кем һуң ул беҙ - кешеләр? Был донъяға ни өсөн килгәнбеҙ? Ниндәй бурыстар ҡуйылған беҙҙең алға? Маңлайыбыҙға яҙылған тормош юлын үтәбеҙме, әллә үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ яҙабыҙмы?..**

# ҮҘ ЯҘМЫШЫБЫҘҘЫ ҮҘЕБЕҘ ЯҘАБЫҘМЫ,



## әллә яҙмыш маңлайға яҙылғанмы?

### Суицидтың бер сәбәбе...

Был Ер йөҙөнә тик беҙ, кешеләр генә, аңлы йән эйәләре булып яратылғанбыҙ. Ҡалғандар, беҙҙеңсә әйткәндә, хайуандар. Ә үҙебеҙҙе шул аңлыҙ хайуандар менән сағыштырһаҡ... Был бөтөнләй беҙҙең файҙаға түгел. Беҙ, кешеләр, бер-беребеҙҙе аңлы рәүештә тапайбыҙ, батырабыҙ, ҡолаһа - типкеләйбеҙ, торорға, аяғына баҫырға ла мөмкинлек ҡалдырмайбыҙ. Ҡайҙан килә был ҡанһыҙлыҡ? Был ҡанһыҙлыкты "йыртҡыслыҡ" тип түгел, ә "кешелек" тип атарға кәрәктер, бәлки? Был ҡыланыштарыбыҙҙы "йыртҡыслыҡ" тип атап, беҙ йыртҡыстарҙың баҫсаһына таш атабыҙ бит.

Тәү сиратта, беҙгә үҙ-ара татыулыҡ етмәй. Күршенә, эргәндәге иптәштәренә, ғаиләнә оло хөрмәт менән ҡарау юҡ. Тарҡаулыкта тормош юҡ, берҙәмлектә - көс. Ә хайуандар берҙәм...

Иң ныҡ әсендергәне - был донъянан үҙ ирке менән китеүселәр (хайуандар араһында ла бындайҙар юҡ). Бер сатҡы ғына өмөт ҡалһа ла йәшәргә тырышырға тейеш кеше. Үҙемдең тәжрибәнән сығып шуны әйтә алам: йырып сыҡҡыһыҙ булып тойолған хәлдәр ҙә аҙаҡтан иғтибарға ла лайыҡ түгел бер күренеш кенә булып ҡаласаҡ. Беҙ был донъяға бер генә киләбеҙ һәм үҙебеҙ артынан яҡты эҙ ҡалдырырға тейешбеҙ. Менәр йыл буйы бер-беребеҙгә тапшыра килгән йәшәйеш эстафетаһын үҙ иркең менән өҙөү - оло гонаһ.

Әҙәм балаһынан әллә ни күп нәмә ләталап ителмәй: ғаилә ҡороу, балалар ишәйтеү һәм улар өсөн унайлы, һәйбәт йәшәү шарттары булдырыу. Уның араһында инде ағас ултыртыу бурысы ҡала. Был бит беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың әллә нисә быуат элек үк төҙөгән яҙылмаған ҡануны, йәшәү кодексы. Был кодекс - һәр һау-сәләмәт кешенең ҡыуанып атҡара ала торған изге бурысы.

Үлемдең тыуымды уҙып китеүенең төп сәбәбе - һуңғы 20-25 йыл дауамында атҡарылған яңырыуҙар, үҙгәртеүҙәр, реформалар һөҙөмтәһендә тыуған депрессия, шуның һөҙөмтәһендә ныҡлап тамыр йәйгән эскелек. Совет осоронда тыуып, был ҡоролошта йәшәп өлгөргән кешеләр бөтә булған үҙгәрештәрҙе үҙ елкәһендә тулыһынса татыны, ауыр кисерҙе: совет осорон, уның емерелеү процесын кисергәндән һуң, оҙайлы "яңырыу" тип аталған аяҡҡа баҫыу ваҡытын йырып сығыу, һис һүҙһеҙ, халҡыбыҙға оло һынау булды. Кем үҙендә ошо һынауҙы йырып сыға торған көс тапманы, был донъянан китте, кемдәргәләр "ярҙам" да иттеләр китергә. Күптәр бар донъяны ситһенеп, үҙ-үҙенә бикләнде, эскелеккә бирелде. Үҙегеҙ беләһегеҙ: ҡайҙа эскелек - шунда ғаилә тарҡала, мал туҙа. Ә ғаиләне юҡтың - иле лә юҡ... Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең тормошобоҙҙа эскелек бик ҙур урын алып тора, сөнки совет осоронда бер сара ла спиртлы эсемлекһеҙ үтмәй ине. Яҙғы баҫыу эштәре тамамландымы - араҡы менән һыйлайҙар, көҙгә уныш йыйып алыуға - тағы. Туйҙар араҡы менән үтә, балалар тыуһа - араҡы менән "йыуыла", кеше үлһә - шулай уҡ араҡы менән оҙатыла.

Үҙемә килгәндә. Ул йәшел йыланды мәктәпкә бармаҫ элек үк тәмләп ҡараным. Шарап эсеп иҫерәп, үҙебеҙҙең урам ҡыҙҙарын баҫтырып йөрөгәнемде бик асыҡ хәтерләйем. Әрменән ҡайтҡас, "йәшел йылан" менән бик оҙаҡ йылдар мауыҡтым. 41 йәшемдә саҡ иҫемә килеп, кәләш алып, 42 йәшемдә Шәмсиә әбейгә (Абдулла ауылында йәшәй, күптәр белә уны) барып, саҡ ҡотолдом ул "ләззәттән".

### Тәмәке тартыу - ул бары тик ғәҙәт

Икенсе яман ғәҙәт - тәмәке. Шаярып ҡына башлағайным, 33 йыл кәрәк булды ул яуыздан ҡотолоуға. Исмаһам, бер көн ял итмәнем унан, тәнәфес булманы. Үпкәләрҙән ни ҡалғандыр инде...

Тәмәкегә ҡаршы кампания көндө (30 май) телевизорҙан Өфөнән Заря Бикташева ханымдың әңгәмәһен, кәңәштәрен тыңлап ултырғайным. Уның һүҙҙәре менән килешә алмайым. Сөнки ул тәмәкеселәр алдында таяҡһыҙ тома һуҡыр кеше һымаҡ. Тәмәкеселәргә ниндәйҙер кәңәш бирер өсөн үҙеңдең дә тәмәкесе тиреһендә булып алыуың мотлаҡ. Тәмәке - наркотик, шуға ла унан ҡотолоуы ҡыйын, тиҙәр. Улай уҡ түгелдер, сөнки мин үҙем больницала ятҡанда ташланым. Наркотиктан да бигерәк, беҙҙең йылдар буйына өйрәнелгән ғәҙәт ул тәмәке. Тәмәке тартыуҙы ниндәйҙер бер ритуалға әйләндереп алғанбыҙ, йәнәһе лә, унһыҙ бер ниндәй эш бармай. Мәҫәлән, ике кеше осрашты, ти. Улар һаулыҡ һорашыу менән, икеһе лә һөйләшеп ҡуйған һымаҡ, кеҫәләренә тәмәкегә тығыла. Шул нәмәне сығарып, тоҡандырғас ҡына әңгәмә башлана. Ғәҙәт һәм бары тик ғәҙәт кенә был. Инде тәмәкенән арыныуыма 10 ай ҙа булып китте, ә һаман үҙем, ғәҙәт буйынса, кеҫәгә тығылам барыбер - тәмәке эҙләйем. Шул ғәҙәттән арынһаҡ - тәмәке ҡоллоғонан да арынырбыҙ. Ә теге наркотик тигән төтөндө бер ҙә үпкәгә индергә килмәй хәҙер. Тыныс йоҡлайһың, эргәңдә: "Ауыҙыңдан еҫ килә", - тип борсомайҙар.

### Донъя шундай матур!

Ә хәҙер иң ҡатмарлы һорауға килеп етек. Яҙмыш маңлайға яҙып ҡуйылғанмы, әллә уны үҙебеҙ яҙабыҙмы? Был һорауға донъялағы 6 миллиард кешенең шул саҡлы уҡ ҡаршы барҙыр. Сөнки быны бер генә кеше лә, нәҡ ошолай, тип иҫбат итә алмай. Был донъяға һәр беребеҙ тик үҙ күҙлегенән генә баға. Мин дә үҙем булып уянып, үҙем булып йәшәйем. Ҡара тәнле лә түгелмен, урыҫ та түгелмен, ә тик башҡорт милләтле ир булып бағам был донъяға. Президент та түгел, генерал да, ә ябай ауыл кешеһемен. Шуға ҡарамаҫтан, бәлки, мин был Ергә ҙур бер миссия үтәргә ебәрелгәнмендер? Улай булғас, ни өсөн был миссия һаман үтәлмәй килә? Йәш үтеп бара бит. Әгәр был турала ентекләберәк уйлай башлаһаң, бик ҡыҙыҡлы һығымталар барлыҡҡа килә. Беҙҙең тормош бик күп ҡаршылыҡтарҙан, беҙҙе һағалаған һәләкәттәрҙән тора.

Үҙемдең тормоштан бер-нисә миҫал килтерәйем. Тимер юлында мине бер фажиғә һағалап торған. Кәрәкле ерҙә, кәрәкле ваҡытта кәрәкле кешеләр мине ул ҡазанан йолоп алып ҡалды. Бында ла шул эскелек касафаты. Тимәк, тимер юлы минең маңлайға үлем булараҡ яҙылмаған. Әрмелә саҡта "ЗИЛ" автомобиленә тағылма ҡуйып торам. Тағылма менән машина араһында ике яуырыным менән ҡыҫылдым. Бер минут элек кейгән һалдат каскаһы ҡыҫылып, минең башты йәнселеүҙән ҡотҡарып ҡалды. Маңлайҙағы яҙыу был осраҡта ла уҡылмай ҡалды. Былтыр урманда трактор менән ағас һөйрәтеп йөрөгәндә, тракторға таҡкан ағасым ысҡынып китеп, мине 11 метрға ситкә "сиртеп" ебәрҙе. Әллә нисә тәкмәстем, шул арала баштан бихисап уйҙар йүгереп үтте. Аяҡтың тубыктан өҫкө өлөшөн генә һындырып ҡотолдом был һәләкәттән. Аллаға шөкөр, тере ҡалдым. Тимәк, ерҙәге бурыстар үтәлеп бөтмәгән, маңлайҙа яҙыуҙар бар әле. Һанай китһәң, байтаҡ һынауҙар аша үтәбеҙ икән шул. Был нимә һуң? Беҙҙе фәрештәләр һаҡлаймы? Әллә осраҡлыҡтар теҙмәһеме был? Күрәһең, был һорауға анық ҡына яуаптар ҙа юҡтыр. Әллә тәбиғи һайлап алыуымы был?

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Беҙҙең донъя - үҙ иркең менән унан китерлек насар түгел, киреһенсә, ғәжәп матур ул. Бик тә тапмаһаң ул матурлыҡты, ултырып, аҙ ғына ваҡытта үҙеңдең үткән тормошоңдо барлап сыҡ. Һис һүҙһеҙ, бәхетле мәлдәреңде күберәк табырһың хәтирәләреңдә. Тағы берҙе ҡабатлайым: хәҙерге проблема аҙаҡтан иғтибарға ла лайыҡ булмаған бер эпизод ҡына булып ҡала. Беҙҙең йәшәйеш тә насарҙан түгел. Әле беҙҙең илдә бәрәү ҙә астан үлмәгән. Тырыш кешеләргә һәр ваҡыт ең һыҙғанып эшкә тотонорлоҡ мөмкинлектәр етерлек. Шул тиклем бай ерҙә (илдә тип әйтергә тел әйләнмәй) йәшәп, беҙ тағы ла байыраҡ йәшәргә хоҡуҡлыбыҙ. Ә бөтә ауырлыҡтар ҙа улар - ваҡытлыса. Быны үҙ елкәмдә күп татығаным булды.**

Әхәт ИШБУЛАТОВ.
Баймаҡ районы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘМӘКЕСЕГӘ КӨН БӨТҺӨН!

## Был тартмаусыларҙың хыялы ғына булырмы?



**Төрлө мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙә ир-егеттәрҙең - 60, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 22 проценты тәмәке тарта. Йәғни, Рәсәйҙә йәшәүсе 44 млн кеше тәмәкесе иҫәпләнә, был ил халҡының өстән бер өлөшөн тәшкил итә. Тәмәке тартыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙан йылына 400 мең рәсәйле үлә. Шуға ла РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы "Халыҡ сәләмәтлеген тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында"ғы закон проекты тәҡдим итә. Эксперттар уны тәмәкегә ҡаршы Рәсәй тарихындағы иң аяуһыҙ закон проекты тип атаны ла инде.**

Был закон ҡабул ителә ҡалһа, тәмәке тартыусыларға еңелдән булмаясаҡ. Беренсенән, тәмәке тартыу рөхсәт ителә торған урындар йылдан-йыл кәмейәсәк. Чиновниктар 2014 йылдан поездарҙа, алыҫ юлға тәғәйенләнгән судноларҙа, вокзал һәм аэропорт территорияларында тәмәке тартыуҙы тыйырға тәҡдим итә. 2015 йылдан ҡунаҡханаларҙа, кафе һәм төнгө клубтарҙа (тыйыу кальянға ла ҡағыла) һәм торлаҡ йорттарҙың подъездарында тәмәке тартырға ярамаясаҡ.

Икенсенән, закон тәмәке етештереп йәки һатып килем алыусыларҙы ла аямаясаҡ. Тәмәке етештереүселәргә тәмәкене рекламалау тыйыласаҡ, улар ниндәйҙер сараларҙа спонсор булараҡ та ҡатнашмаясаҡ.

Шулай уҡ 2013 йылдан бөтөн ил буйынса "тәмәке ларектары" ла юҡҡа сығыуы ихтимал. Закон ҡабул ителеү менән тәмәкене эре сауҙа нөктәләрендә генә һатыу мөмкин буласаҡ, унда ла тауарҙы күрһәтеп һалыу тыйыла, һатып алыусылар уны каталог буйынса ғына һайлап, һатып аласаҡ.

Был закон проекты буйынса иң һуңғы яңылыҡ: Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы тәмәкенең хаҡын күтәрергә тәҡдим итә. Яңыраҡ ҡына Финанс министрлығында, тәмәкегә акциздар йылына 40 процент тирәһенә үҫәсәк, тип белдерһәләр, Голикова етәкләгән ведомствола тәмәкенең хаҡын бер нисә тапҡырға ҡиммәтләндерергә кәрәк, тип иҫәпләйҙәр.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Тәмәкеселәрҙә импотенция ике тапҡырға йышыраҡ күҙәтелә. Күп һанлы статистик тикшереүҙәр был зыянлы ғәҙәт һәм енси проблемалар араһында тығыҙ бәйләнеш булыуын раҫлай. Был кире йоғонто тик 1986 йылда ғына асыҡлана. Ул саҡта ике сит ил андрологы ҡан тамырҙары зарарланыуҙан барлыҡҡа килгән импотенциянан яфа сиккән пациенттарының 93 проценты тәмәке тартыуын асыҡлаған. Был проблемалар артерия тарайыу сәбәпле етерлек кимәлдә ҡан килмәүҙән барлыҡҡа килә. Быны сәбәбе атеросклероз йә инфаркт осрағындағы кеүек үк: артерияның сите ҡалынай һәм холестерин ултыра. Тик бында ҡан тамырҙары йөрәктекенә ҡарағанда йоҡараҡ һәм тиҙерәк тарая. Никотин килтергән зыян быны менән генә бөтмәй. Бер яҡтан, ул вена ҡан тамырҙарын йомшарта һәм ҡан тиҙерәк ағып сыға. Икенсе яҡтан, артериялар быуылыуына килтерә һәм яңы ҡан ауыр хәрәкәт итә.**

**Ә хәҙер иң көтөлмәгәне: Техас ғалимдары никотиндың антиафродизиак үҙенсәлеге булыуын асыҡлаған. Был иһә тәмәкенең йоғонтоһо оҙаҡ йылдарҙан һуң ғына һиҙелер (артериялар тарайһын өсөн күп йылдар тәмәке тартыу кәрәк), тигән уйҙан кире ҡайтырға мәжбүр итә. Сөнки тәмәке тартҡандан һуң ир-аттың енси теләге һүнә. Был хаҡта Фрейд та яҙған. Әммә психоанализдың атаһы үҙе ауыҙынан төрөпкәһен төшөрмәҫ булған, һөҙөмтәлә ауыҙ ҡыуышлығы яман шеше менән ауырып донъя ҡуйған. Тик был тәмәкенең бер генә эҙемтәһе әле: ҡырҡ йәшенә етмәҫ элек үк ул енси мөнәсәбәткә инмәй йәшәгән. Быға тәмәке булышлыҡ итеүен Фрейд, әлбиттә, белмәгән.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



Бөтөн ғазаптар һәм ауырыуҙар беҙгә һабаҡ итеп бирелә, улар беҙҙең етешһеҙлектәребеҙҙе (уҫал ғәмәлдәребеҙҙе һәм уйҙарыбыҙҙы) төҙәтеү өсөн саҡырылған. Был тормошта нимә була, барыһы ла беҙгә һабаҡ өсөн кәрәк.

Тазарыныу һәм һауығыу беҙҙең гонаһтарыбыҙ ғәфү ителгәнлектә аңлата. Әммә ҡабат гонаһ ҡыла башлаһаҡ, ул ғәмәлдәрҙең тағы ла ҡатыраҡ булып кире ҡайтыуы ихтимал.

Барлыҡ бәхетһеҙлектәрҙең һәм ҡыуаныстарҙың сәбәбе - үҙебеҙҙә. Тышҡы сәбәптәр - икенсел, эске сәбәптәр, эске торош - беренсел. Һауығыу, яҙмышты үҙгәртеү, эске трансформация өсөн быны аңларға кәрәк.

Әгәр кеше эсендә тамуҡ йөрөтә икән, ҡайҙа ғына бармаһын, ул уны үҙе менән алып йөрөй. Әгәр күңелендә ожмах икән, уны һәр ерҙә лә ожмах оҙата.

Үҙендә нимәләр үҙгәртһәң дә, артынса тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә үҙгәреш булыр. Барыһы ла үҙеңдән тора тигән ябай ғына хәҡиҡәтте аңлау зарур.

Тормошта беҙ уйҙарыбыҙ, теләктәребеҙ, ынтылыштарыбыҙ менән нимә тыуҙырабыҙ, шуға эйә булабыҙ. Беҙҙең яфаланыуыбыҙ бер кемгә лә кәрәк түгел.

Бөтөн ваҡиғалар ҙа законға ярашлы. Сағылыш ҡануны буйынса беҙ был донъяға нимә ебәргәнбеҙ, шуны алабыҙ, шуға ла бөтөнөһөн дә нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк.

Әгәр нимәләр һеҙ уйлағанса килеп сыҡмаған икән, тимәк, шулай кәрәк булған. Беҙгә һабаҡ, беҙҙең үҫеш, беҙҙең камиллашыу өсөн.

Бер ваҡытта ла бер нәмәгә лә көймәгеҙ. Ниндәй генә проблемалар тыумаһын, уларҙы карманы эшкәртеү тип ҡабул итегеҙ һәм ҡыуанығыҙ. Беҙҙең тирбәлеш шулдай уҡ тирбәлешке тарта: ҡыуанып, беҙ ҡыуаныс, бәхет тартабыҙ.

Кеше рухи үҫеш юлына баҫып, мөхәббәткә сорнала һәм уны тарата башлау менән тирә-яҡ әкиәти рәүештә ыңғай яҡҡа үҙгәрә һәм төрлө яҡтан ярҙам килә башлай.

Башҡаларға ла ошо юлды һайларға ярҙам итегеҙ: башҡаларға ярҙам итеп, беҙ үҙебеҙгә ярҙам итәбеҙ, башҡаларға зыян эшләп, бары тик үҙебеҙгә зыян итәбеҙ. Һау һәм бәхетле булырға теләүсе кеше башҡаларға ла шундай булырға ярҙам итергә тейеш! Яңғыҙ сәскәгә сүп үләндәре араһында үҫеүе ауыр. Үҙегеҙҙе урап алған мөхитте таҙартығыҙ. Тирә-яғығыҙҙа илаһи гармониялы, камил кешеләр йәшәһен!

Хатта күп булмаһа ла, үҙегеҙҙә булған белемегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. Әгәр губка гел генә һыуҙы һеңдерһә, бер ваҡыт уның батыуы ла ихтимал. Ә уны һығып торғанда, ул яңынан саф һыуҙы һеңдерә аласаҡ. Шуның кеүек, яңы белем алыу өсөн булғанын бирергә кәрәк!

Беҙ барыбыҙ ҙа донъяны танырға тыуғанбыҙ, шуға ҡайҙа ғына ҡерһәк тә: һаҙлыҡҡамы, күлгәме, йылғағамы, ул урынлы булыр. Беҙ сағыштырып, анализлап, ҡапма-ҡаршы ҡуйып ҡарап киләсәккә һайлау эшләйбеҙ. Әгәр кеше һаҙҙың нимә икәнен белмәй икән, уға унда ла ожмах тойолор, унда ла лилиәләр үҫә. Шуға күрә үҙегеҙҙе хаталарығыҙ өсөн әрләмәгеҙ - улар барыһы ла кәрәк! Шулай уҡ башҡаларҙы ла ғәйепләмәгеҙ. Хатта Аллаһы Тәғәлә үҙе беҙҙе ғәйепләмәй. Кем һаҙлыҡҡа батҡан, бәлки, ул тәрәнерәк өйрәнәләр һәм таныйҙыр. Кем башҡаларҙы ғәйепләй, ҡағиҙә булараҡ, үҙе лә тап шундай һабаҡ ала.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, һәр ваҡиға ике категорияға бүленә: берәүҙәре - күңелгә ятышлы, икенселәре - файҙалы.

Кем юлында осраған ауырлыҡтарға ҡыуана белә, ул уларҙың сираттағы һабаҡ икәнен белә һәм уларҙы ҡыуанып ҡабул итә, ысынлап үҫешә. Илаһтың ҡанундарын аңлау һәм ҡабул итеү, беҙҙе урап алған тормошта булған бөтөн нәмәне ҡабул итеү мөһим.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аң һәм тән бәйләнеше

Аңдың тән ҡуҙәнәктәренә йоғонтоһо тиҫтәләрсә йылдар ныҡлы өйрәнелде, әммә был бәйләнеште микроскоп ярҙамында асыҡлап булмай. Бәлки, киләсәктә быға телескоп ярҙам итер, сөнки Клив Бакстер был "беренсел ҡабул итеү" химик реакциялар йәки нервылар импульстарына нигеҙләнмәгән, ә Йыһан тәбиғәтенә һалынған, тип раҫлай. Бындай ҡараш яңы түгел.

Бынан йөҙҙәрсә йылдар элек Австралия актеры Маттиас Александр үҙенең һөйкәтәре менән уйында ғына һөйләшеп, сәхнә теле проблемаларынан ҡотола. Ул: "Муйыным еңел борола, башым өҫкә лә аҫҡа ла йөрөй, арҡам турая һәм борола", - тип ҡабатлай. Шунан башлап Александр ысулын ҡулланып, донъяның төрлө мөйөштәрендәге күп уҡытыусылар сәләмәтлегендәге "дауалап булмаған" кешеләргә ярҙам итә.

Был ысул гипноз, үҙ-үҙеңде ышандырыу һәм Фелденкрайс, Симонтон, Сильва кеүек аң менән тән араһындағы бәйләнеште камиллаштырыу менән шөғөлләнгән сағыу шәхестәр аша киң танылыу тапты. Мойше Фелденкрайс был өлкәгә "Хәрәкәт аша аңлау" эше менән өлөш индерә. Был хеҙмәттә психик һәм физик процестар берләштерелә. Карл Симонтон яман шеш ауырыуҙарын хатта "дауалап булмаған" осраҡтарҙа ла ремиссия мәсьәләләрендә ысын квант һикереүе яһай: ул ауырыуҙарға көсөргәнештән арынырға ла ҡан күҙәнәктәренең ямаш шеш менән көрәштә еңеп сығыуын күҙалларға тәҡдим иткән. Фәндә уның методикаһы "психонейроиммунология" атамаһын ала. Хосе Сильва хәҙер"Сильва ысулы" тип аталған аң менән идара итеү ысулын эшләй. Ул төрлө илдәрҙәге миллионлаған кешене насар ғәҙәттәрҙән арыныу, тәндең ағзалары һәм системалары эшен нормаллаштырыу, ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү һәм бихисап мөғжизәле һәләттәр алыуға килтергән көсөргәнештән арынған альфа-торошҡа инергә өйрәтә.

Бөгөн "психонейроиммунология" атамаһы "киберфизиология" термины менән алмашынды, сөнки дауалау тураһындағы фән аң һәм тәндең үҙ-ара бәйләнешен аңланы, атап әйткәндә, уның иммун системаһы менән генә сикләнмәүен, ә организмдың һәр күҙәнәгенә таралыуын асыҡланы. Бөтөн күҙәнәктәр, туҡымалар һәм ағзалар аңдың бойороҡтарын "ишетә".

Был йүнәлештең һөҙөмтәләрен йомғаҡлап, киберфизиологияның мөһим мәлдәрен тәҡдим итәм. Көсөргәнештән арыныу ғәҙәттәгесә башҡарыла. Уйығыҙҙа ғына тәнегеҙҙең һеҙҙе борсоған урынын күҙ алдына килтерегеҙ. Уның менән матур итеп һөйләшегеҙ, уның "төҙәлеүен" һорағыҙ. Уның нисек яуап "биреүен" тыңлағыҙ. Һуңынан был участканы сәләмәт тип күҙ алдына килтерегеҙ. Унышығыҙға ярҙам итәсәк бер нисә кәңәш:

- артыҡ уйламағыҙ - эшләгеҙ һәм һөҙөмтә көтөгөҙ;
- күҙәнәктәрегеҙгә ҡәтғи бойороҡтар бирмәгеҙ, дошмандарса мөнәсәбәттәрҙән ҡасығыҙ, улар бит беҙҙең дуҫтар;
- "сығышығыҙҙы" алдан әҙерләмәгеҙ - һүҙҙәр иркә һәм ихлас булһын;
- мотлаҡ көсөргәнештән арынығыҙ, кәрәк икән, кирегә һанау ысулын ҡулланығыҙ;
- уйығыҙҙағы картиналарҙы файҙаланығыҙ: уны нисегерәк күҙ алдына килтереү мөһим түгел, аң "кем" тураһында һүҙ барғанын үҙе аңлар.

Һеҙҙең табибығыҙ киберфизиология менән таныш булмауы ла ихтимал. Әммә аң һәм тән һеҙҙеке һәм уларҙы дауланыуға ғына түгел, профилактикаға ла йүнәлтеп була. Киберфизиология медицина дауаһын алыштырмай, әммә уға ярҙам итә.

**Роберт СТОУН.**



## 5 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
